✓ ***Аҡыл - шул уҡ баҡса: уны нисек тәрбиәләһәң, шуға ярашлы уңыш йыйып аласаҡһың. Әгәр сүптәрен утап һәм ашлап торһаң, ул һине үҙең көткәндән дә артығыраҡ бүләкләйәсәк. Әгәр сүп үләндәренә үҫергә мөмкинлек бирһәң, бер ваҡытта ла мөмкинлектәреңде тормошҡа ашыра алмаясаҡһың. Уңышлы кешеләр аҡыл баҡсаһына инергә рөхсәт бирелгән уйҙарын бик ентекле тикшерә. Һиңә, ысынлап та, баҡсаңа аҙ ғына кире фекер индереүгә лә рөхсәт бирергә ярамай.***

***Робин ШАРМА.***


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

22 - 28 ИЮНЬ (ҺӨТАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№25 (547)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Урман менән бәйле...**

һайлаған һөнәребеҙ



5-6

**"Урал батыр" эпосы һәм...**

Боронғо Греция мифтары араһында ниндәй уртаҡлыҡ бар?



7

**Йылы яҡҡа коштар осоуы ла...**



8-9 миграция тип атала

**Кулак балаһы**



10

14 ТВ-программа


*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## *Йәштәребеҙҙең бөгөнгө хеҙмәт идеалы ниндәй: яратҡан һөнәре буйынса ең һыҙғанып йәмғиәткә хеҙмәт итеү маҡсатымы, әллә ни бары йәшәү өсөн эшләүме?*

***Зәки ӘЛИБАЕВ, филология фәндәре кандидаты, М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт университеты доценты, БР Яҙыусылар союзы ағзаһы:*** Бер генә тарихи осорҙа ла йәштәр бөтәһе бер төрлө булмаған. Ике тиҫтәгә яҡын йыл йәштәр менән эшләгәс, яҡшы беләм: һәр замандағы кеүек үк, бөгөн дә йәштәребеҙ шартлы рәүештә бер нисә төркөмгә бүленә. Мәҫәлән, әле бына үҙебеҙҙең башҡорт йәштәрен генә алайыҡ. Улар араһында йәмғиәтебеҙгә, халҡыбыҙға хеҙмәт итеү маҡсаты менән янғандар бар һәм ундайҙар байтаҡ, тип әйтер инем. Миҫалдар бик күп, шуға күрә үҙем белгәндәрҙе аныҡ атап тормаһам да, бер генә исемде телгә алып китке килә шулай ҙа. Уңышлы йәш ғалимдарыбыҙҙың береһе (фән буйынса республика дәүләт премияһы лауреаты), университеттың башҡорт филологияһы факультеты деканы Луиза Сәмситова етәкселегендә факультет университетта иң алдынғы урынға сығыуға өлгәште: һәр йәһәттән камил, бөтә күрһәткестәр буйынса ла яҡшы иҫәптә килә коллектив. Һәм, тәбиғи, бындай алдынғы ҡараш, тормошта уңышлы була белеү "серҙәре" студенттар аңына ла һеңдерелә. Тимәк, тап бына ошондай шарттарҙа киләсәктә йәмғиәтебеҙгә файҙа килтерерҙәй белгестәр әҙерләнә, тигән һүҙ. Үкенескә күрә, икенсе төр йәштәр ҙә йыш осрай. Улар үҙҙәренең киләсәген тулыһынса күҙ алдына килтерә алмай, ни теләгәндәрен, ни эшләгәндәрен дә белмәйҙәр. Шул арҡала юғары уҡыу йорттарына осраҡлы килеп эләккәндәр күп. Эт саба, тип, бет саба, тигәндәй, Берҙәм дәүләт имтихандары һөҙөмтәләре буйынса - был уға кәрәкме, юҡмы - бөтәһе лә вузға инеп ҡалырға ынтыла. Ахыр siктә, вуз тамамлап та, икенсе һөнәр буйынса эшләп йөрөүселәр күп хәҙер, шул уҡ ваҡытта йәмғиәтебеҙ эшсе һөнәрҙәренә ҡытлыҡ кисерә. Ни өсөн БДИ һөҙөмтәләре буйынса математика йә рус теленән бөтә балаларҙың да балдары, әйтәйек, 55-тән кәм булмаҫҡа тейеш һуң әле? Был, ахыр сиктә, совет осорондағы шул уҡ "тигеҙләү" принцибы булып килеп сыға түгелме? Ә бит хәҙерге студенттар араһында "әлепте таяҡтан" айырмаған, ике һүҙҙе бәйләп яҙа алмағандар байтаҡ. Киләсәктә бындай "белгес"тәр йәмғиәткә файҙа килтермәү генә түгел, үҙҙәренең яҙмыштарын да боҙа. Әгәр шунда үҙенең һәләтенә, көсөнә ярашлы һөнәр һайлап, эшләп кенә йөрөһә, үҙенә лә, йәмғиәткә лә файҙа булыр ине. Бында, әлбиттә, йәштәрҙе ғәйепләргә кәрәкмәй, сөнки уларға шундай заманда - аныҡ перспективаһы ла, программаһы ла булмаған йәмғиәттә йәшәргә тура килә...

***Наҙгөл САФИУЛЛИНА, йәш белгес:*** Хәҙерге заман йәштәренең, XX быуаттан айырмалы рәүештә, ғөмүмән, ниндәйҙер идеалы бар тип әйтмәҫ инем. Шул иҫәптән хеҙмәт идеалы тигән төшөнсә лә бөгөнгө көн йәштәре өсөн ят һәм сит. Күптәр өсөн үҙе теләгән һөнәрҙе үҙләштереү, күңеле ятҡан уҡыу йортонда белем алыу ауыр хәл ителгән мәсьәләләр рәтендә булғанда, хеҙмәт баҙарында бер үк кимәлдә яратҡан да, йәшәү өсөн етерлек килем дә килтергән эш урыны табыу еңелдән түгел. Шулай уҡ бөгөнгө йәштәр, матди хәленә ҡарамайынса, әҙенә түҙеп, барына ҡәнәғәт булып йәшәүҙе үҙ итмәй. Улар ҡулдарында һәйбәт кәрәҙле телефон тотоп йөрөргә, өҫтәренә сифатлы кейем кейергә, тәмле ашарға, еңел машинала елдерергә, дуҫтары менән өйҙә түгел, ә ниндәйҙер модаға ингән, популяр урындарҙа осрашыуҙы хуп күрә. Быны өсөн, тәбиғи, кеҫәлә аҡса ҡыштырларға тейеш. Ә яратҡан һөнәрең буйынса ең һыҙғанып илгә хеҙмәт итеү, күпселек осраҡта, матди ихтыяжды түгел, ә бары тик әхлаҡи яҡтан ғына ҡәнәғәтләндереү килтерә. Был да, әлбиттә, тормош өсөн әҙ түгел, шулай ҙа кеҫәһендә елдәр уйнаған кеше өсөн ул үҙ бейеклеген һәм әһәмиәтен юғалта. Шуға күрә йәшәү өсөн генә эшләгән йәштәрҙе нимәләлер ғәйепләү урынһыҙ һәм мәғәнәһеҙ. Шул уҡ ваҡытта, бәлки, улар бөгөнгө көндә эшләү өсөн генә йәшәй кеүек күренәлер, ләкин улар күңелендә лә илһөйәрлек тойғоһо бөтөнләй юғалған, тип уйлау хата булыр ине.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*АФАРИН!*

# ИҢ МӨҺИМЕ - СӘМ,

## ә ул сифат Гөлшатта бар



**Белорет ҡалаһынан Гөлшат Фазлетдинова 10 мең метрға йүгереү буйынса Рәсәй чемпионы булды, тип хәбәр иттеләр Белорет районы хакимиәтенән.**

Рәсәй рекордын ҡуйыусы 20 йәшлек башҡорт ҡыҙы Гөлшат Фазлетдинова Белорет педучилищеһы уҡыусыһы. Бөгөнгө көндә ул Рәсәйҙең атҡаҙанған тренерҙары Татьяна һәм Евгений Сенченко етәкселегендә күнекмәләр үтә.

Чемпионат Мәскәүҙәге "Лужники" комплексының Ҙур спорт аренаһында еңел атлетика турниры сиктәрендә үткән. Был ярыштар 2013 йылдың 10-18 авгусында еңел атлетика буйынса Мәскәүҙә үтәсәк донъя чемпионаты алдынан үҙенә күрә бер имтихан һымаҡ ҡабул ителгән. Гөлшатҡа килгәндә, һәр кем уның спортты етди яратыуын, алдына ҡуйған маҡсатына ынтылыусан, сәмсел булыуын билдәләй. Спортта тап ошондай сифаттар мөһим, тиҙәр бит. Тимәк, Гөлшатта характер бар, тимәк, Гөлшаттың киләсәктә лә етди еңеүҙәр яулаясағына ышанырға була.

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# ТҮҘЕМЛЕК КӘРӘК...

## эҫеһенә лә, һыуығына ла



**Ошо рубрика аҫтында сыҡҡан мәҡәләләрҙе ҙур ҡыҙыҡһыныу менән уҡып барам. Аҡса эшләүҙең төрлө юлдарын әҙләп табыусыларҙың күп булыуына, тормош ауырлығына һылтанып ултырмаған, ә донъя көтөргә тырышҡан уңған кешеләргә ҡарап һоҡланам. Мин дә үҙемдең ғаилә бюджетын тулыландырыуға ярҙам итеүсе эшмәкәрлегем хаҡында бәйән итергә булдым.**

Үҙ ҡуранда етештергән һөт-ҡаймаҡты йәки башҡа төрлө аҙыҡ-түлекте һатып, бер аҙ аҡса эшләү өсөн йәшәгән урын ҡулайлы булырға тейештер ул, миненсә. Эргә-тирәлә ҙур ҡасаба йәки ҡала булмаһа, етештергән аҙыҡты һатыу ҙур мәсьәләгә әйләнә. Үҙҙәре лә етерлек күләмдә һөт аҙығы етештергән күрше ауыл халҡына тәҡдим итеп булмай бит инде. Был йәһәттән миңә һәм ауылдаштарыма унайлы, сөнки эргәбеҙҙә генә Магнитогорск ҡалаһы урынлашҡан. Киске һәм иртәнге һауымдан әҙерләнгән һөт-ҡаймаҡты унда алып барып һатыу күп ваҡытты ла алмай һәм, иң мөһиме, аҙыҡ-түлек ҡалаға барып еткәнсе үҙенең күркәмлеген юғалтмай. Нимәләр һатҡанда уның тышҡы йөҙө, сифаты матур булыуы оло әһәмиәткә эйә. Шуға күрә, оҙон юл үтеп килгән һәм ҡарар күҙгә ҡотһоҙға әйләнгән аҙыҡ-түлекҡә бик үк яҡын бармаһалар, яҡын аранан алып килергән тиҙ үк таратып алып бөтәләр. Шулай уҡ һатыусының да өҫтө-башы ипле һәм таҙа булыуы һатыу эшенә ыңғай йоғонто яһай. Ошоно иҫтә тотоп, мин һәр саҡ бөхтә итеп кейенеп, һөт-ҡаймағымды таҙа һауыттарға ғына һалып, ап-аҡ япма менән ябып һатыуға сығам. Әлегә тиклем бер тапҡыр ҙа алып барған әйберемде һатмайынса ҡайтҡаным юҡ.

Аҡһым һатып, аҡса эшләү күпселек хужабикәләрҙең шөғөлө. Шуға күрә үҙемдең тағы ла бер аҡса эшләү юлы менән бүлешмәксемен. Ер ҡарҙан әрселер-әрселмәҫтән, ҡалала баҡса эштәренә әҙерлек башлана. Кемдер орлоҡ һата, икенселәр ағас үҫентеләре тәҡдим итә. Бындай кешеләрҙең, гәҙәттә, ҡала буйлап бер-нисә һатыу нөктәһе була һәм, тәбиғи, бар ерҙә лә үҙҙәре тороп һата алмай. Шуға күрә, ситтән һатыусы яллау - берҙән-бер юл. Мин бернисә йыл рәттән ағас үҫентеләре һатҡан оҙондай нөктәлә һатыу эшен дә алып барам. Аҡса, иҫәп менән әллә ни эш итә белмәгән кеше лә рәхәтләнеп һатыу итергә мөмкин, сөнки тауар һанаулы ғына ҡалдырыла һәм уны үлсәп һатырға ла кәрәкмәй. Был эшемдән мин көнөнә 500 һум аҡса эшләйем. Уға һөт-майҙы һатҡан аҡсаны ла ҡушһаң, арыу ғына аҡса һуғам. Әлбиттә, эҫе көндәрҙә ҡояшта янып тороу, ямғырлы һыуыҡ көндәрҙә өшөп ҡалтыраныу рәхәт түгел, ләкин тәмле ашайым һәм матур кейенәм тиһәң, бер аҙ түҙергә тура килә.

**Гөлгөнә ХӘЛИТОВА.**
**Әбйәлил районы**
**Красная Башкирия ҡасабаһы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### *Йәштәребеҙҙең бөгөнгө хеҙмәт идеалы ниндәй: яратҡан һөнәре буйынса иң һыҙҙанып йәмғиәткә хеҙмәт итеү маҡсатымы, әллә ни бары йәшәү өсөн эшләүме?*

(Башы 1-се биттә).

***Артур БАТЫРШИН, программалаусы:*** Әлеге заманда илгә хеҙмәт итеү тигән төшөнсәнең барлығына шикләнеп тә ҡуйыла. Көнбайыш илдәре демократияһына яраҡлы, беҙҙә лә хәҙер үҙең өсөн генә тырышыу, үҙ мәнфәғәтеңдә ҡайғыртыу, үҙ файҙаңды эҙләү маҡсаттары менән йәшәү бер кемде лә аптыратмайҙыр, тип уйлайым, сөнки бөгөн йәштәр фәҡәт өс маҡсаттан сығып эшләй. Беренсеһе уның - аҡса. Һәр кем байҙарҙын нисек йәшәгәнен күреп-белеп, үҙе лә шундай тормошта йәшәү өсөн тырыша. Кешене хәрәкәткә килтереүсе икенсе сәбәп - танылыу яуларға ынтылыу. "Мин кемдән кәм, мин дә шундай уҡ оло маҡсаттарға өлгәшә алам бит", тигәнерәк сәмләнеү тойғоһона нигеҙләнгән тормош һәм эш принцибы. Өсөнсөһө инде уның - власть. Кем тырыша, күберәк аҡса эшләй, шул башҡалар менән үҙ абруйы ярҙамында идара итеп булыуын яҡшы аңлай һәм шуға ынтыла. Шул уҡ ваҡытта тап ошо принциптар кешегә коллективтан, хөкүмәттән әҙерҙе йәки ярҙам көтөп ултырырға түгел, ә үҙ көсөнә таянырға, эшен асыуға булышлыҡ итә. Матур итеп йәшәйем, тиһән, туктауһыҙ эҙләнергә, камиллашырға, тырышырға кәрәк. Шулай итеп, бөгөнгө заманда хеҙмәт идеалы иң тәүҙә үҙенә ныҡлап аяҡҡа баҫыу, унан инде туғандарыңды, дуҫтарыңды һәм миләттәштәреңде ошо маҡсатҡа йәлеп итеү, тәжрибәңде таратыу рәүешендә һынлана миңә. Хеҙмәт энтузиазмы, идеал, тигәндән, бик һирәктәр генә хәҙер үҙенең күңеленән сыҡҡан, бәләкәйҙән хыяллаған, яратып башҡарған эшен таба алалыр. Һәм бына шул яратҡан шөғөлөңдө эшкә әйләндереү - шулдыр тип уйлайым хеҙмәт идеалы. Шул һүрәттә генә кеше, айырыуса йәштәр, үҙ көҙөрен, үҙ һөнәре көҙөрен белеп, үҙенә һәм яҡындарына ғына түгел, ә иленә, йәмғиәткә файҙа килтерә аласаҡ.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

● 2013 йылдың икенсе яртыһына **50665** индекслы "Киске Өфө" гәзитенә **378 һум 36 тингә** яҙылырға була. Июндә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе тәүге 10 уҡыусыбыҙ - Ноғман Мусиндың **"Алдар батыр"**, 10 уҡыусыбыҙ Рауфан Мортазиндың **"Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

● Май айында гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе **Баймаҡ районы** Ярат ауылынан Хәбирә Ғәҙелшина, Урге Иҙрис ауылынан Рәмзиә Мостафина, **Учалы районы** Илтабан ауылынан Мәүлизә Закирова, Ҡунаҡбай ауылынан Ринат Даянов, **Өфө ҡалаһынан** Рәйсә Әсәҙуллина, Т. Сәхәпов, **Әбйәлил районы** Буранғол ауылынан Әкрәм Моратов, **Ейәнсура районы** Үрге Бикбирҙе ауылынан Ҡасим Янбаев, **Салауат районы** Лағыр ауылынан З. Йәнтүрина, **Стәрлебаш районы** Стәрлебаш ауылынан Рима Мәғдиева - **Ноғман Мусиндың "Алдар батыр"**;

**Бөрйән районы** Иҫке Собханғол ауылынан Рәмилә Юлсурина, Резедә Сәғитова, **Ғафури районы** Красноусол ҡасабаһынан Миннур Фәткезаманов, **Әбйәлил районы** Елембәт ауылынан Фәрзәнә Шәмсетдинова, **Ауырғазы районы** Мораҙым ауылынан Ғәлимйән Бәхтегәрәев, **Учалы районы** Истамғол ауылынан Әҙилә Ғәйетколова, **Баймаҡ районы** Ярат ауылынан Наилә Юлғотлина, **Күмертау ҡалаһынан** Әлфиә Рәжәпова, **Салауат ҡалаһынан** Ф. Ҡадырова, **Өфө районы** Дмитриевка ауылынан Г. Зиннурова - **Гүзәл Ситдиҡованың "Күсле ил - көслө ил"**;

**Әбйәлил районы** Елембәт ауылынан Флүрә Ноғоманова, Үтәгән ауылынан Нәсимә Йәһүҙина, Хәмит ауылынан Шәмсиә Мөлөкова, **Межгорье ҡалаһынан** Фәнүзә Әксәнова, **Учалы районы** Озерный ауылынан Нәйрә Ишмөхәмәтова, **Баймаҡ районы** Ярат ауылынан Мәғәтифә Исҡужина, Әхмәр ауылынан Рәмилә Мәтинова, **Йылайыр районы** Юлдыбай ауылынан А.Аҡҡужина, **Белорет районы** Ботай ауылынан Разия Ирғәлина, **Хәйбулла районы** Әбүбәкер ауылынан Марат Мәмбәтов - **Мәрйәм Бураҡаеваның "Көҙгө ысыҡ"**;

**Учалы районы** Ҡайыпҡол ауылынан А. Абдрахманова, **Ейәнсура районы** Ибрай ауылынан Земфира Аҡбутина, **Көйөргәҙе районы** Көйөргәҙе ауылынан Йәмил Чурин, **Өфө ҡалаһынан** Фәүзәнә Аҡманова, **Әбйәлил районы** Елембәт ауылынан Гөлсөм Шәрипова, **Яңауыл ҡалаһынан** Илүзә Әгзәмова, **Стәрлебаш районы** Шәкәр ауылынан Әлифә Байназарова, **Дүртөйлө ҡалаһынан** Хәмиҙә Ҡарағолова, **Туймазы ҡалаһынан** Рима Ибатуллина **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарына лайыҡ булды.

● **"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһына ҡушылып,** Әбйәлил, Баймаҡ, Бөрйән, Йылайыр, Ейәнсура, Күгәрсен, Хәйбулла райондары ауылдарындағы хеҙмәт ветерандарына "Киске Өфө" гәзитен яҙҙырып бүләк иткән РФ Дәүләт Думаһы депутаты **Сәлиә Мырҙабаеваға** сикһеҙ рәхмәтлебеҙ. Ул яҙҙырған гәзиттәр ауылдарҙағы медицина пункттары һәм халыҡты социаль яҡлау учреждениелары адрестарына ебәрелә.

Ошондай уҡ изге ғәмәл башҡарған, йәғни Бөрйән һәм Ишембай райондары ауылдарындағы туғандарына, республика ауылдарындағы мәсеттәргә "Киске Өфө" гәзитен яҙҙырған эшҡыуар **Фәниә Йәнбирҙинаға**, "Киске Өфө"нө яҙҙырып бүләк итеп, Көйөргәҙе районындағы һәм Өфө ҡалаһындағы туғандарын һәм дуҫтарын ҡыуандырған эшҡыуар **Иршат Аҫылғужинға** шулай уҡ сикһеҙ рәхмәтлебеҙ. Үҙҙәре лә рәхмәтле булып йәшәһендәр!

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔2013 йылдың июлендә Башҡортостанда Kronospan Holdings East Ltd компаниялар төркөмөнән ағас-юныҫҡы һәм ламинацияланған плиталар етештереү буйынса ҙур предприятиеһы төҙөлә башлай. Ер участкаһын ҡуртымға алыу һәм генераль подряд килешеүҙәренә бөгөн Республика йортонда ҡул ҡуйылды.

✔Санкт-Петербургтың "Ленэкспо" күргәҙмә үҙәгендә Халыҡ-ара иҡтисади форум асылды. Унда Башҡортостан делегацияһы ла ҡатнаша. Сара сиктәрендә иҡтисади форумда корпорациялар һәм төбәктәр араһында килешеүҙәр төҙөлә. Форумда 4,4 мең кешенең ҡатнашыуы көтөлә. Сараға БРИКС илдәре, АҠШ, Евросоюз, Япония, Ғәрәп Әмирлектәренән йәмғеһе 89 сит ил делегацияһы килəсәк.

✔Республика Президенты Рөстәм Хәмитов Бахрейн принцессаһы менән осрашты. "Рияда" төркөмө президенты Шейх Дейя бинт Ибраһим Әл Хәлифә Башҡортостанға эш визиты менән килде. Осрашыуҙа республика предприятиелары менән хеҙмәттәшлек итеү, берлектәге халыҡ-ара проекттарҙа ҡатнашыу мәсьәләләре һәм инвестициялар тураһында һүҙ барҙы.

✔БР Президенты Рөстәм Хәмитов "РусГидро" асыҡ акционерҙар йәмғиәте идараһы рәйесе урынбаҫары Джордж Рижинашвили менән осрашыу үткәрҙе. Унда Башҡортостан менән "РусГидро" йәмғиәтенең уртаҡ проекттарын тормошҡа ашырыу барышы тикшерелде. Рөстәм Хәмитов һыҙҙаренсә, яҡтар энергияны һаҡсыл файҙаланыу технологиялары технопаркын һәм гидроэнергетика ҡорамалдары етештереү заводын төҙөү буйынса пландарҙы әүҙем тормошҡа ашыра.

✔РФ Дәүләт Думаһы депутаты Сәлиә Мырҙабаева "Земство табибы" проектына ярашлы, 2014 йылға һәм артабанғы йылдарға ауыл еренә эшкә барған медицина хеҙмәткәрҙәренә дәүләт ярҙамы күрһәтеүҙе дауам итеү тураһында закон проектын әҙерләү, шулай уҡ проектҡа бәләкәй ҡалаларҙы индереү башланғысын хупланы. "Земство табибы" проектын дауам итеү мәсьәләһе "Берҙәм Рәсәй" партияһы рәйесе Дмитрий Медведевтың партия активы менән осрашыуында тикшерелде. "Ошо программа 2012 йылда ауыл медицинаһына һиҙ меңгә яҡын табипты йәлеп итергә мөмкинлек бирҙе, быйыл йәнә биш мендән ашыу табип ауыл еренә эшкә барасаҡ", - тине Сәлиә Мырҙабаева.

✓ *Халыҡ ижады булмаһа, халыҡ ижадын тулылаусы, системаға һалыусы ғалимдар ҙа булмаҫ ине. Тимәк, ғалим булыуы менән улар халыҡҡа бурыслы. Ә уларҙы һаҡлау - бөтәбеҙҙең дә бурыс.*



ИШАРА

# БУЛҒАН ҺАЙЫН...

## бүтәгәнән түбән бул!

**Һөнәри бурыстарым менән бәйле төрлө кешеләр менән осрашырға, тимәк, төрлө холоҡ-ҡылыҡты, шәхестең үҙ-үҙен тотоу, аралашыу манераһын күрергә тура килә. Юғары вазифа биләп тә, кешелек сифатын юғалтмаған, үҙенә йомош менән килгән һәр кемде ихлас ҡабул иткән, тыңлай белгән, аҡыллы кәңәштәрен биреп, эскерһеҙ ярҙамын тәҡдим иткән ысын мәғәнәһендә дәрәжәле етәкселәр ихтирам һәм һоҡланыу тыуҙырһа, юғары белемгә эйә булыр-булмаҫтан танау сөйгән, йә булмаһа, "бәләкәй генә портфель тотҡан" эшем эйәһе ҡайһы бер бәндәләр ытырғаныу хисе уята...**



Ҡыҙғаныска ҡаршы, һуңғылары самаһыҙ ишәйеп китте аҙаҡҡы йылдарҙа. Шулай булмай ни, "Бер эшсегә - биш түрә", тип әйтмәле заманда йәшәйбеҙ бит хәҙер. Әммә барыбыҙ ҙа түрә булып, күрһәтмәләр биреп кенә ултырһаҡ, тормошобоҙ арбаһын кем алға һөйрәр, ил-йортто кем кейендерер һәм туйындырыр? Бына шул яғы хаҡында уйларға ине иң элек. Ләкин... Бөгөнгө йәштәр вуз бөтөү менән ниндәй ҙә булһа "ҡалъялыраҡ" урынға ултырып ҡалырға, "оҙон аҡса" артынан сабырға тырыша шул. Бер уйлаһаң, был насар ҙа түгел шикелле: йәш саҡта, көс-ҡеүәтең ташып торғанда үҙеңде һәр яҡлап һынап ҡарарға кәрәк! Шулай ҙа кешегә Аллаһы Тәғәлә тарафынан бирелгән төп бурыстар тураһында ла иҫтән сығарырға ярамайҙыр, моғайын! Иң беренсе бурысыбыҙ, мәҫәлән, тыуған еребеҙгә, беҙгә ғүмер бүләк иткән, тәрбиәләп үҫтергән атай-әсәйҙәребеҙгә ихтирам һәм хөрмәт күрһәтеү, уларҙы ҡәҙерләй белеү булһа, икенсеһе, минеңсә, патриотлыҡ булырға тейеш. Ә нимә ул патриотлыҡ? Быны һәр кем үҙенсә аңлай, үҙенсә тәкрарлай... Миңә ҡалһа, был тойғо кешенең ата-әсәһенә, тыуған йортона, тыуған яғына, туған халҡына, иленә һәм теленә һөйөүҙән башланып, артабан ана шул үҙе өсөн ғәзиз төшөнсәләрҙе ҡәҙерләп һаҡлау, байытыу, бәҫен күтәреү, уларға һәр яҡлап булышлыҡ итеүгә ҡайтып ҡала! Был йәһәттән миҫал итеп алырҙай осраҡтар бик күп тирә-яғыбыҙҙа.

Мәҫәлән, әле Башҡортостаныбыҙҙың һәр район-ҡалаһында тип әйтерлек йәшәп ятыусы чечен халҡын ғына алайыҡ. Уларҙағы тыуған ер, милли ғорурлыҡ тойғолары хайран ҡалырлыҡ бит! Үҙ халҡының азатлығы, бойондороҡһоҙлоғо, милли сафлыҡ өсөн бер ни ҙә, хатта ғүмерҙәрен дә йәлләмәй улар. Быға беҙ үҙебеҙ шаһит: Чечен илендәге ҡан ҡойоштарҙы, ундағы буталыштарҙы күптәребеҙ үҙ күҙҙәре менән күрҙе, үҙ иңендә татыны. Тик бер чечен халҡы ғына ғәйеплеме был үлеш-ҡырылыштарҙа? Улар үҙҙәренең киләсәген, тотош халыҡ яҙмышын уйлап, милләт намыҫын яҡлап, илен-көнөн ҡурсалап ҡорбан булалар түгелме ни? Рәсәй буйлап таралғандарының да "аҡса эшләр өсөн" генә йөрөмәгәнлеген аңларға була...

Ә бөтөнләй сит мөхиттә, ят милләттәр араһында йәшәгән чечендарҙағы милли үҙенсәлектәр һуң? Бер-береһенә ярҙам итергә әҙер тороуҙары өҫтөнә, балаларын (хатта әсәләре башҡа милләт вәкиле булғанда ла) үҙҙәренсә таҙа һөйләшергә, үҙҙәренең "минлеген" танырға өйрәтеп үҫтерәләр. Ә беҙ аптыраған булабыҙ: "Әсәһе мәрйә булған чечен ҡыҙы нисек итеп үҙен тулыһынса чечен милләтенән тип таный һәм бының менән нисек ғорурлана!?"

Үҙебеҙҙең башҡорттар хаҡында быны әйтә алабыҙмы икән бөгөн? Шикләнәм... Араларында бер генә урыҫ йәки башҡа милләт вәкиле булмаған унлаған башҡорт урыҫсалап ләстит һата! Хатта оло йәштәге әбей ҙә ватып-емереп һүҙ ҡыҫтырып маташа бит әле: "Сынук, дучка, патихунка чай ҙа пейегеҙ, разгауаривать успеем..." йәнәһе. Һикһәнгә яҡынлаған ил инәһе булыр кеше - милләт әсәһе шулай итеп ултырғас, башҡаларына ни үпкә инде... Заманса мәҙәнилек түгел был, ә бөгөнгө наҙанлыҡ һәм аңһыҙлыҡ! Үҙ иркебеҙ менән милләт тамырына балта сабыу!..

Трибуналарҙан, матбуғат баҫмалары йәки башҡа мәғлүмәт саралары аша лаф ороу менән генә яҡлай ҙа, һаҡлай ҙа алмаясаҡбыҙ милли ҡиммәттәребеҙҙе. Эште һәр кемдең үҙенән, үҙ ғаиләһенән башлауы мөһим. Ул-ҡыҙҙарыбыҙ үҙҙәренең башҡорт балалары булыуҙарынан тартынмаһын, үҙ еребеҙҙә үҙҙәрен хужа итеп тойһон өсөн барыбыҙға бергә булырға, милли ғорурлыҡ тойғолары менән йәшәргә, бер-беребеҙгә һәр яҡлап ярҙам ҡулы һуҙырға кәрәк. Мотлаҡ шулай булырға тейеш!

**Мотал РӘМОВ,**
**РФ һәм БР Журналистар союзы ағзаһы.**

ШАҢДАУ

# "ҠОМАРТҠЫНЫ МӨХӘРРИРЛӘРГӘ ЯРАМАЙ"

**Гәзитебеҙҙең үткән һанындағы ошо мәҡәләне уҡығас, ҡулға ҡәләм алмай түҙмәнем. Мин ябай кеше, ғалим-тарихсы, фәйләсуфтар кимәленән һүҙ әйтә алмам, шулай ҙа халыҡ вәкиле булараҡ, фекеремде әйтергә бурыслымын, тип иҫәпләйем.**

Мәҡәләне уҡығас "Диңгеҙсе һәм уның улы" тигән бер фәһемле мәҫәл иҫкә төштө. Диңгеҙсе атай улының уҡып, ғалим, яҙыусы булыуын теләй. Улы уҡып, һөнәр алып ҡайта һәм былай тип хәбәр һала:

- Атай, грамматиканың бөтә нескәлектәрен беләм хәҙер, ә артабан риторика ғилемен өйрәнгем килә...

Атай кеше улының артабан да уҡырға теләүенә шатланып риза була. Егет уҡып, белемен арттырып, тағы атай йортона ҡайта. Аш табыны артында улы грамматика, риторика тураһында әҫәрләнеп һөйләй. Атаһы улының һүҙен бүлдереп:

-Грамматика тураһында ишеткәнем бар, ул бөтә сәнғәттең нигеҙе - дөрөҫ яҙыу, хатаһыҙ һөйләү, ә риториканың нәмә икәнен белмәйем, - ти.

- Дөрөҫ грамматика - сәнғәт нигеҙе, ә риторика унан да көслөрәк, ҡеүәтлерәк фән, уны үҙләштергән кеше бер ниндәй ауырлыҡһыҙ теләһә ниндәй бәхәстә еңә, шулай уҡ ялғанды ла дөрөҫ тип иҫбатлай ала, - тип аңлата улы.

- Әгәр ул риторика шундай көс-ҡеүәткә эйә икән, бына хәҙер уның көсөн миңә лә күрһәт. Өҫтәлдәге ике йомортҡаны өсәү ит...

- Бер ҡыйынлығы ла юҡ уның, арифметиканы ярҙамға саҡырабыҙ, - ти егет. - Йомортҡаларҙы һана әле.

- Бер, ике.

- Бер, ике - икеһе бергә өсәү була ла ҡуя.

- Һмм, улай булғас, бер йомортҡа - миңә, икенсеһе - әсәйеңә, ә һин риторика менән яһаған йомортҡаңды ашайһың инде...

Ошо мәҫәлдәге кеүек, риторика сәнғәтенә күсеп, халыҡ ижадын хосусилаштырып, халыҡҡа "риторик йомортҡа" һоғондорорға маташыу булдымы был "Урал батыр" эпосы варианттарын килтереп сығарыу. Хәҙер кемдәрҙер "Кесе "Урал батыр", "Мәшһүр "Урал батыр", "Бөйөк "Урал батыр"ҙарҙы тыуҙыра башламаҫмы? Юл башлаусы булһа, дауам иттереүселәр табыла ул. Халҡыбыҙ "Урал батыр" эпосын, теге диңгеҙсе ҡарт кеүек, ҡулынан ысҡындырмаҫ бер ваҡытта ла, ә риторикалар, күпкә өмөтләнеп, буш-ас ҡала түгелме?

Ә инде Розалия Солтангәрәеваның "Урал батыр тураһындағы ҡарһүҙ"енә килгәндә, бер ниндәй дәлилһеҙ, Әсмә апай Усмановаға ғына һылтанып, халыҡ исеменән халыҡ ижады яһау, "Урал батыр" эпосының икенсе варианты тип раҫлау дөрөҫ һүҙме? Мин быға һис тә ышанмайым. Сөнки Мөхәмәтша Буранғолов төрмәләрҙә ултырып, ғаиләһе ауыҙынан тартып алып һуңғы һыйырын һатып, ауылдар буйлап башҡорт халыҡ ауыҙ-тел ижадын йыйып йөрөгәндә нисек Утарбайҙағы сәсәниә-өләсәй тураһында ишетмәне икән? Был мөмкин түгел. Элек һабантуйҙар оло халыҡ фестивале, форумы һымаҡ үткән. Ауыл, райондарҙан йырсы, ҡурайсы, бейеүселер, сәсән-сәсәниәләр йыйылған. Ғәбит сәсән, Хәмит сәсәндәр исемдәрен, уларҙы күрмәһәк тә, ишетә инек бала саҡта. Хатта атаҡлы һунарсылар, солоҡсолар ҙа халыҡ күңелендә, телендә ине. Әйтештәр ярышында ал бирмәгән Зөбәйҙә апай Юланова тураһында "Әй, әйтә бит, минут эсендә ҡайҙан уйлап сығара һала!" тип, ололарҙың һоҡланып һөйләгәне хәтерҙә.

Халыҡҡа хеҙмәт итәсәк ғалимдарыбыҙ халыҡ ҡомартҡыларын бүлгеләп, телгеләп, зыянлы зыялылар хәлендә ҡалмаҫмы? Халыҡ ижады булмаһа, халыҡ ижадын тулылаусы, системаға һалыусы ғалимдар ҙа булмаҫ ине. Тимәк, ғалим булыуы менән улар халыҡҡа бурыслы. Ә уларҙы һаҡлау - бөтәбеҙҙең дә бурыс.

**Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов 2015 йылда Өфөлә ШОС ағзалары булған дәүләт башлыҡтары Советы ултырышын һәм БРИКС дәүләттәре һәм хөкүмәттәре башлыҡтарының осрашыуын үткәреүгә әҙерлек буйынса республика ойоштороу комитеты ултырышын үткәрҙе. Билдәләнеүенсә, әлеге ваҡытта федераль ойоштороу комитетының эш төркөмдәре булдырыла. Республика ойоштороу комитеты составында быдай төркөмдәр раҫланған һәм улар айырым йүнәлештәр буйынса эшләй.

✓Башҡортостан Президенты республиканың мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренә дәүләт наградалары һәм гранттар тапшырҙы. Гранттар өсөн быйыл бюджеттан 35 млн һум аҡса бүленгән. Грантҡа лайыҡ булыусылар араһында атаҡлы ҡурайсы Роберт Юлдашев, Башҡортостан юлдаш телевидениеһының "Байыҡ" һәм "Башҡорт йыры" проекттары авторы Рита Өмөтбаева ла бар.

✓20 июндән Башҡортостандың юғары уҡыу йорттарына документтар ҡабул итеү башланды. Әлегә документ биреүселәр аҙ. Сөнки сығарылыш кисәләре һәм уҡыусыларға аттестаттар тапшырыу 23 июндә генә үтә. Документтар 25 июлгә тиклем тапшырылып бөтөргә тейеш. Быйыл абитуриент бер юлы биш вузға документ тапшыра ала. Быйыл Башҡортостан вуздарында 10708 кеше бюджет урындарына уҡырға инә ала.

✓Эҫе һауа торошо баҫыуҙарҙа саранчалар таралыуына уңайлы мөхит тыуҙыра. Әле Хәйбулла, Стәрлебаш, Учалы райондарында саранчалар булыуы асыҡланған. Ауыл хужалығы министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, хәл-торош контролдә тотола, химик эшкәртеүҙәр үткәрелә.

✓М. Нестеров исемендәге музейҙы реконструкциялау эштәре менән бәйле 30 июнгә тиклем Пушкин урамынан Свердлов урамына тиклемге Гоголь урамы участкаһы ябыла.

✓IX "Ҡала мөхите-2013" социаль реклама фестиваленә эштәр ҡабул итеү башланды, тип хәбәр иттеләр БР Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары буйынса агентлығының матбуғат хеҙмәтенән. Быйылғы фестиваль "Таҙа ҡалала йәшәйек!" девизы аҫтында үткәрелә. Төп номинациялар тураһында фестиваль сайтының "Ҡатнашыусылар өсөн" бүлегендә белергә мөмкин.

**"Башинформ"дан.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ҺАЙЛАУҘАРҒА...
## старт бирелде

**2013 йылдың 8 сентябре Башҡортостан Республикаһы Үҙәк һайлау комиссияһының 18 июндә үткән ултырышы ҡарары менән бишенсе саҡырылыш БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттарын һайлау көнө тип билдәләнде. Был хаҡта шул көндә үк уҙғарылған матбуғат конференцияһында ҮҺК рәйесе Хәйҙәр Вәлиев белдерҙе.**

Башҡортостан Республикаһы Конституцияһына ярашлы, яңы парламентҡа 110 депутат һайланырға тейеш, шуларҙың тап яртыһы - бер мандатлы һайлау округтары, 50 проценты партия исемлеге буйынса буласаҡ. Был көндә шулай уҡ ҡайһы бер ҡала округтары, муниципаль район, ҡала һәм ауыл биләмәләре советтарына һайлауҙар үтәсәк. Йәки электорат йөмғеһе 356 депутат мандаты өсөн тауыш бирәсәк.

Һайлауҙар беренсе тапҡыр үҙгәртелгән ҡануниәт нигеҙендә үтәсәк. Яңылыҡтар тауыш биреүҙәрҙең беренсе тапҡыр сентябрҙең икенсе йәкшәмбеһендә билдәләнеүе һәм унда партияларҙың күп булыуына ҡағыла. Әгәр Рәсәй территорияһында матбуғат конференцияһы үткән көнгә ҡарата 70 сәйәси партия теркәлеп, шуларҙың 53-ө һайлауҙарҙа ҡатнашыу хоҡуғына эйә булһа, Башҡортостан территорияһында уларҙың 41 төбәк бүлексәһе ойошторолған һәм шуларҙың 38-е һайлауҙарҙа ҡатнашыу хоҡуғына эйә. Әлеге ваҡытта 15 фирҡә сәйәси кампанияла ҡатнашыу теләген белдерә. Күп партиялылыҡ шарттарында һайлауҙарҙа Һайлау бюллетендәрен эшкәртеү комплексы (КОИБ) ҡулланылмаясаҡ. Сөнки улар киңлеге - 20, оҙонлоғо 60 сантиметр булған бюллетендәрҙе генә уҡырға һәләтле, ә бындай күләмгә ни бары 10-12 партия ғына инә. ҮҺК вәкилдәре белдереүенсә, мәҫәлән, һайлауҙа ҡатнашыу хоҡуғына эйә партияларҙың барыһы ла теркәлеү үтә ҡалһа, партия исемлектәренең оҙонлоғо метрлап үлсәнәсәк.

РФ Президентын һайлауҙарҙа ҡулланылған веб-камераларҙа тулыһынса файҙаланылмаясаҡ. Улар ҡайһы бер участкаларға ғына урынлаштырыласаҡ, ә барлыҡ участкаларҙы ла тәьмин итеү өсөн 100 миллион һум сығым талап ителә. Һайлауҙарҙың республика бюджетынан финансланыуын һәм бының өсөн 400 миллион һум аҡса тотонолоуын иҫәпкә алғанда, өҫтәмә сығымдарҙың булмауы ла хәйерләрәктер, бәлки.

Яңылыҡтарға ҡабат урап килгәндә, хәҙер сәйәси партиялар үҙҙәре тәҡдим иткән кандидаттар өсөн ҡултамғалар йыйыуҙан азат ителгән. Үҙтәҡдим менән кандидатлыҡҡа дәғүә итеүселәр элек һайлау округындағы һайлаусылар һанының ике проценты күләмендә ҡултамға йыйырға тейеш булһа, хәҙер был һан 0,5 процент итеп ҡалдырылған. Бер мандатлы һайлау округтары 10 йылды күҙаллап ойошторолған. Һайлау участкалары биш йылға булдырылған. Участка комиссияларының да эш мөҙҙәте шундай. Әйткәндәй, уларҙың һаны әүәлгенән кәмеп, 3415 итеп ҡалдырылған. Бынан тыш, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттарын һайлау өсөн һайлаусыларҙың йәшәүенә булған урындарында тағы ла 34 участка ойошторолған.

Беренсе ғинуарға ҡарата республикала 3 миллион 60 мең 964 һайлаусы теркәлгән. Шуларҙың 304203-ө - физик мөмкинлектәре сикләнгән категория. Һайлау участкаларында улар үҙ ихтыярын белдерһен өсөн барлыҡ шарттар тыуҙырыла, хәрәкәт итә алмаусыларға комиссия ағзалары үҙҙәре бара. Ә инде был көндә үҙенең һайлау участкаһына килә алмаусылар (юлдағылар, бер урында теркәлеп, икенсе урында йәшәүселәр һ.б.) өсөн 70 мең теркәүҙән төшөрөү (открепительный) танытмалары әҙерләнәсәк.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

ӨФӨЛӘ БАР БЕР ЙОРТ



# КӨСЛӨ РУХЛЫЛАР...
## күңел күҙе менән дә күрә

**Мәҙәниәт һарайҙарына, театрҙарға, китапханаларға юлды тамам онотҡан бугай, хатта ҡайһы бер мәҙәниәт йорттарының ишегә ҡайһы яҡтан асылғанын да белмәйбеҙ. Инвалидтарҙың Өфө ҡалаһы Кустарная урамындағы Ижад йортонда үтәсәк фестиваль тураһында ла осраҡлы ғына белеп ҡалдыҡ. Ә бында ул көндә һуҡырҙарҙың республика үҙешмәкәр коллективтарын туплаған "Ижад йәрминкәһе" фестивале гөрләй ине.**

Ҡайҙан ғына килмәгәндәр бында! Бөтә Рәсәй һуҡырҙар йәмғиәтенең Бәләбәй, Салауат, Дүртөйлө, Стәрлетамаҡ, Мәләүеҙ, Учалы, Сибай, Белорет урындағы ойошмаларынан һәүәҫкәр музыканттар, йырсылар, бейеүселәр, нәфис һүҙ оҫталары йыйылғайны. Артистарың ары торһон! Башҡорт, рус, татар, украин милли кейемдәренең сағыу биҙәктәренән күҙ ҡамаша, тирә-йүндә сәхнәгә сығырға әҙерләнеүселәрҙең тулҡынланыуы, ығы-зығыһы күҙәтелә...

"Ике йылға бер "Ижад йәрминкәһе" үткәреп алыу матур йолаға әүерелде, - тип һөйләй был сара хаҡында Бөтә Рәсәй һуҡырҙар йәмғиәтенең Башҡортостан ойошмаһы рәйесе Юрий Акшенцов.- Урындарҙа беҙҙең һәр береһе 4-5 ҡала һәм районды берләштергән 16 ойошмабыҙ бар. Ғәрип булыуҙарына ҡарамаҫтан, беҙҙең йәмғиәт ағзалары тормошто яратыусы, хеҙмәт һөйөүсән, матурлыҡҡа, сәнғәткә ғашиҡ кешеләр, әүҙемдәр, дәртлеләр, талантлылар. Яҙмыш һынауын күтәрә алмай, хәсрәткә бирелеп, өйҙә ултырыуҙы хуп күрмәй улар, күптәре йәмғиәткә файҙалы эш менән мәшғүлдәр"

Инвалидтарҙың Ижад йортонда "Ағиҙел"башҡорт хоры, "Дуҫлыҡ", "Сударушка", "Умырзая" вокаль ансамблдәре, "Күңел күҙе" халыҡ театры, бал бейеүҙәре студияһы, нәфис һүҙ түңәрәге эшләй. Шул уҡ ваҡытта инвалидтарҙың ижад ҡеүәһе былар менән генә сикләнмәй. Әлеге фестиваль көндә Ижад йортонон икенсе ҡатында күреү һәләтен юғалтҡан инвалидтарҙың ижад иткән картиналары һәм ҡул эштәре күргәҙмәһе лә ойошторолғайны. Был хаҡта һүҙ ярҙамында тасуирлау бик ауыр мәсьәлә булыр, тим, сөнки уларҙы үҙ күҙҙәрең менән күреү кәрәк... Быны, мәҫәлән, Мәләүеҙҙән запастағы хәрби хеҙмәткәр, I төркөм инвалид Фәнил Яманаевтың "Салауат эҙҙәре буйлап" тигән серияһан ике картинаһы. Автор үҙе Мурманскиҙа һыуаҫты атом крейсерында 23 йыл хеҙмәт иткән Хәрби Диңгеҙ Флоты ветераны булараҡ, Салауат мәңгелеккә һәрәлгән Балтик диңгеҙе буйындағы шыҡһыҙ крепосты, дауыллап ярһыған диңгеҙ күренешен, уның төҫтәр палитраһын бик оҫта сағылдыра алған. Травма арҡаһында инвалидлыҡҡа дусар булған был "диңгеҙ бүреһе" - Фәнил Сафуан улы менән ҡыҫҡа ғына әңгәмәлә уның хаҡында бер нисә һүҙ әйтеү - бер нәмә лә әйтмәү ул, әлбиттә. Уның тормошо, яҙмышы романға торошло.

Ҡул эштәре күргәҙмәһенең башҡа экспонаттарын ҡарайбыҙ. Күреү һәләтен юғалтҡан кешеләр ижады тигәнгә ышанғы килмәй хатта. "Беҙҙең халыҡ күңел күҙе менән күрә" тип, ҡалай дөрөҫ әйткән Юрий Николаевич. Ихтыярһыҙҙан, уйлап ҡуяһың: әгәр күҙҙәре лә күрһә, был кешеләр тағы ниндәй мөғжизәләр менән һоҡландырмаҫ ине донъяны! Әйткәндәй, күреү буйынса инвалидтар араһында сәнғәт оҫталары ғына түгел, юристар, спортсылар, йәмғәт эшмәкәрҙәре лә барлығын беләбеҙ. Шундайҙарҙың береһе - Башҡорт дәүләт университетын тамамлаған юрист Ринат Бикбаев - беҙгә ошо йәмғиәт сиктәрендә үткәрелеп тороусы спорт бәйгеләре хаҡында бәйән итте. Күптән түгелге спартакиадала, мәҫәлән, армрестлинг, ҡыңғыраулы тупты ҡыуып, голбол (футболға оҡшаш) уйнау буйынса ярыштарҙа ла һынатмаған йәмғиәт ағзалары. Ауыл ерҙәрендә йәшәүсе инвалидтар араһында баҡса үҫтереп, себештәр алып ҡарап, үҙ көсө менән көн күреүсе уңғандар ҙа бар, тип һөйләне ул.

Хәйер, фестивалгә килгән талант эйәләре хаҡында һөйләп - һүҙ, яҙып ҡағыҙ ҙа еткерер булмаҫтыр. Шуға күрә киләһе фестивалдә үҙегеҙ килеп ҡарағыҙ. Ижад йорто директоры Гөлсәсәк Зарипова әйтеүенсә, быйыл көҙ, ноябрҙә, инвалидтарҙың күҙ терәп торған ошо ижад усағы эшләй башлауына 40 йыл тулыу айҡанлы тағы ла бик матур саралар ойошторолаҫаҡ.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# МӘСКӘҮГӘ - "САПСАН"ДА...

**Тиҙҙән тиҙ йөрөшлө "сапсан" поезы беҙгә лә килеп етәсәк: Башҡортостан республиканың төньяғы буйлап үтәсәк Мәскәү - Ҡаҙан - Екатеринбург юғары тиҙлектәге магистраль (ВСМ-2) проектына индерелгән. Өфөнө (Пермь, Ижевск һәм башҡа ҡалалар кеүек) төп магистраль менән айырым тармаҡ тоташтырасаҡ.**

- Төп магистраль Яңауыл районынан үтәсәк, - тип һөйләй Башҡортостан Хөкүмәтенең беренсе вице-премьеры Рәүеф Ноғоманов. - Әле үк Пермь крайының Чернушки ҡалаһынан йәки Яңауылдан Пермь һәм Өфөгә табан тармаҡ һуҙыла башлаясаҡ.

Өфө - Яңауыл юлы 160 км оҙонлоҡта буласаҡ, дүрт станция төҙөргә вәғәҙә итәләр. Был арала поездар сәғәтенә 200 километр тиҙлектә елдерәсәк.

- Әле урауҙан Ҡаҙан - Өфө араһын беҙ 24 сәғәттә үтһәк, киләсәктә быны өсөн ни бары 3 сәғәт китәсәк, - тип өмөтләндерә беренсе вице-премьер. -Ҡаҙан-Мәскәү араһы - тағы өс сәғәт. Мәскәүгә, шулай итеп, алты сәғәттән ашыу ваҡытта барып етергә буласаҡ.

Ләкин Мәскәүгә "Сапсан"да елдереү мөмкинлегә тиҙ генә булмаҫ әле. Магистралдең Мәскәү - Ҡаҙан тәүге сиратын төҙөүҙе тамамлау 2018 йылға планлаштырыла, шунан икенсе сират төҙөлөшө башлана. Билет хаҡын - хатта яҡынса күләмдә лә - чиновниктар әлегә әйтә алмай.

- Сит ил аналогтарынан күренеүенсә, был авиация транспортына ҡарағанда күпкә арзаныраҡ, беҙҙә лә шулай булырға тейеш,- ти Рәүеф Ноғоманов.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Эстонияның Палдиски ҡалаһында Салауат Юлаевтың тыуған көнө билдәләнде. "Ағиҙел" башҡорт мәҙәни йәмғиәте йыл һайын Палдиски ҡалаһына сәфәр ойоштора. Быйыл да был матур йола тормошҡа ашырылды. Сарала ҡатнашыусылар Салауат һәйкәленә сәскәләр һалды, башҡорт халҡының милли геройын хөрмәтләп иҫкә алды.

✓Ошо көндәрҙә Өфөлә Халыҡ-ара шашкалар буйынса донъя чемпионаты тамамланды. 2 июндән 19 июнгә тиклем дауам иткән көсөргәнешле турнирҙа Өфө спортсыһы Александр Георгиев үҙенең чемпион титулын һаҡлап ҡала алды һәм өсөнсө тапҡыр был юғары исемгә лайыҡлы булыуын иҫбатланы. Айнур Шәйбәков иһә, чемпионат барышында тамамасылар араһында иң күп тауыш йыйып, "Иң һөйкөмлө ҡатнашыусы" исеменә лайыҡ булды, бынан тыш, "Финал Б" уйындарының бронза еңеүсеһе булып танылды.

✓Өфөнөң Пушкин урамындағы скверына Рудольф Нуриев исемен бирергә тәҡдим ителде. Бындай тәҡдим менән республика баш ҡалаһының ижади интеллигенцияһы сығыш яһаны. Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры буйындағы аллея күп өфөләләргә таныш, был ҡала халҡының яратҡан ял урындарының береһе. 1998 йылдың 17 мартында театр фасадында бөтә донъяға танылған бейеүсе Рудольф Нуриевтың барельефы урынлаштырылды. Йыл дауамында скверҙа ремонт, төҙөкләндереү эштәрен үткәреү, фонарҙар, эскәмйәләр ҡуйыу планлаштырыла.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте сайтының балалар өсөн тәғәйенләнгән версияһы июль башында эшләй башлаясаҡ. Сайт буйлап оҙатып йөрөүсе итеп бал ҡорто һайланған. Порталда тик рус телендәге мәғлүмәттәр урын алаҫаҡ. Балалар сайтында яңылыҡтар булмаясаҡ. Ресурс 6-12 йәштәрҙәге балалар өсөн тәғәйенләнгән. Улар ҡала тарихы, уның иҫтәлекле урындары, ял зоналары тураһындағы мәғлүмәт менән таныша аласаҡ.

✓Таллиндағы "Ағиҙел" башҡорт йәмғиәте активисы, Ишембай егете Хәйҙәр Фазлиәхмәтов Салауат Юлаевҡа һәм башҡа каторжандарға бағышлап, Ҡөрьәндән сүрәләр уҡыны.

*ЙӘШТӘР ҠОРО*

**Йәштәр - донъяны алға әйҙәгән, уның эҫе ҡаҙанында ҡайнаған социаль ҡатлам буларак, һәр заманда ла үҙенсәлекле фекер йөрөтә. Бөгөнгө йәштәр араһында ла фекерлеләре күп. Йәштәребеҙҙе төрлө ижтимағи саралар - ғаилә, компьютер, интернет, урам, кино индустрияһы, төрлө кимәлдәге уҡыу йорттары менән бер рәттән, тағы бихисап саралар тәрбиәләгән ваҡытта, уларҙың был донъяға, әйләнә-тирәләге кешеләргә ҡарашы ниндәй икән? Бөгөнгө ҡунаҡтарыбыҙ - Өфө урман хужалығы техникумының урман һәм урман паркы хужалығы бүлегенең 2-се курс студенттары Азамат Йомабаев, Замир Исҡужин, Альбина Лотфуллина һәм Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре бүлегенең 1-се курсы студенты Алһыу Солтанова.**

# УРМАН МЕНӘН БӘЙЛЕ...

## һайлаған һөнәребеҙ



**➔ Һеҙҙең уҡыу йортон тамамлаған күп студенттар эколог булып эшләй - Башҡортостан урмандарын хәүеф-хәтәрҙән ҡурсалаусылар сафын тулыландыра. Еребеҙ-һыуыбыҙ, урман-күлдәребеҙ бысраҡлығы уларҙы ошо аҙымға этәрәлер, моғайын. Бөгөнгө экологик хәлде һуңғы сиккә еткән, тип, саң ҡағырға ваҡыт, тип уйламайһығыҙмы?**

**Альбина:** Мин эколог буласаҡмын. Һәм мине бәләкәй аҙымдар менән ахыр сиккә етеп килеүебеҙ борсой. Быны бер ниндәй махсус әҙерлекһеҙ ҙә күрергә була. Боҙлоҡтар ирегәнгә күрә, һыуыҡ һауа массалары беҙгә һыуыҡ һауа алып килә. Шуға яуымтөшөм дә күбәйҙе, яҙ һуң килде, һалҡын булды. Кешеләр тәбиғәткә ял итергә сыға ла, усаҡтарын һүндермәй китә, һүндерелмәгән тәмәке төпсөктәре тураһында әйтеп тә торорға түгел. Янғындар бит башлыса кеше аңһыҙлығы арҡаһында килеп сыға. Ә урмандар яна. Ҡарағай ағасы биш йыл һайын ғына орлоҡ биреүен иҫәпкә алғанда, хәлдәр саң ҡағырлыҡ шул. Урман үҫтереү өсөн күпме йылдар кәрәк икәнен күптәр аңламай.

**Азамат:** Ерҙең файҙалы ҡаҙылма байлыҡтарын да күпләп тәләфләүебеҙ күңелде ҡыра. Ни өсөн былай ҡыланабыҙ һуң, хәлдәр шул тиклем үк сиктән сығырлыҡмы икән ни, тип тә уйлағаным бар. Моғайын, ҡайһы бер бөтөп барған матдәләрҙе, әйтәйек, нефть, газ материалдарын башҡа төрлө ағыулыҡтар менән алыштырып та булалыр, күп илдәр хәҙер шулай итә лә, әммә кемгәлер был кәрәкмәй - кемдер автомобиль индустрияһын гел генә үҙенең нефть ятҡылыҡтарына бәйле хәлдә тоторға тырыша. Урмандар тураһында. Беҙ бәләкәй саҡта ҡайын һыуы эсергә йөрөй торғайныҡ урманға. Ҡайын һыуын эскәс, тишекте, балсыҡ һылап, ямап китә инек. Хәҙер килеп, ҡалай дөрөҫ эшләгәнбеҙ икән, тим. Өйҙән пластилин алып барып, йәбештереп ҡуйһаң, тағы ла яҡшыраҡ. Юғиһә, һыуы эселеп, тишеге ямалмаған ағастың һау ағастан айырмаһы 2-3 йылдан айырым-асыҡ күренә.

**➔ Урман хужалығы техникумында алған белемегеҙ бөгөнгө көндә ни тиклем актуаль һәм кәрәкле тип әйтә алаһығыҙ? Ниндәй уңыштарығыҙ бар?**

**Альбина:** Был уҡыу йортона туғыҙынсы синыфты тамамлағас уҡ барырға ынтыла инем, алмайҙар булып сыҡты. Мәләүез ҡалаһында тыуып үҫһәм дә, бала сағым ауылда - олатай менән өләсәйемдәрҙә үтте. Ауыл менән бәйле һөнәр һайла, тип, олатайым өгөтләне, минең ауылға яҡыныраҡ булыуымды теләне. Шуға күрә, ун беренсе синыфты тамамлағас, имтихандарым һөҙөмтәләре буйынса Башҡорт дәүләт аграр университетына бик еңел генә үтә алһам да, Урман хужалығы техникумын һайланым. Бында бик шәп белем бирәләр. Күптән түгел уҡытыусым менән ҡайын ағастары үҫентеләрендә күҙәтелгән ҡайһы бер ауырыуҙарҙы тикшерҙек, эшебеҙҙе бер ғилми конференцияға ебәрҙек.

**Алһыу:** Был уҡыу йортона абитуриенттар күберәк килһен, тип, волонтерҙар хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашам. Был хәрәкәт сиктәрендә республикабыҙ райондарына барып, уҡыусылар менән осрашабыҙ, техникумыбыҙҙың уңыштары менән таныштырабыҙ. Беҙҙе ҡыҙыҡһынып тыңлайҙар, килергә теләктәрен белдерәләр. Үҙем иһә, техникумды тамамлағас, алған һөнәрем буйынса кадастрҙар палатаһына эшкә урынлашҡым килә, хыялым тормошҡа ашыр, тип ышанам.

**Замир:** Мин был техникумға атайым юлын дауам итер өсөн килдем. Атайым тыуған ауылыбыҙҙа - Хәйбулла районының Йәнтеш ауылында урмансы булып эшләгәс, бәләкәйҙән ошо һөнәр үҙенә ылыҡтырғандыр инде. Уҡыуымды тамамлағас, мотлаҡ урман хужалығына эшкә барасаҡмын - әле үк бер-нисә урынға саҡырап торалар, шуныһы ҡыуандыра.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

*ҺАМАН ИҪТӘ...*

# БЕР МИНУТ ТЫН ТОР!

**Ҡала округы хакимиәтендә үткән сираттағы матбуғат конференцияһы башҡаларынан айырылып торҙо. Сөнки унда һүҙ илебеҙҙең һәр өйөнә инеп, һәр кешенең яҙмышында үҙ эҙен ҡалдырған дата - 22 июнь - Бөйөк Ватан һуғышы башланған көндә ойоштороласаҡ саралар тураһында барҙы. Улар менән ҡала хакимиәтенең Йәштәр сәйәсәте буйынса комитет рәйесе Урал Килсенебаев һәм "Йәштәрҙе патриотик тәрбиәләү үҙәге", эҙәрмәндәр отряды вәкилдәре таныштырҙы.**

22 июндә баш ҡаланың "Биатлон" спорт-һауыҡтырыу комплексы эргәһендәге "Сәләмәтлек" яланында (Комаров урамы, 1) көндөҙгө сәғәт икелә Башҡортостандың ғына түгел, Урал-Волга буйы төбәгенең хәрби-тарихи һәм хәрби-патриотик клубтары ағзалары (барлығы 90 кешенең килеүе көтөлә) ҡатнашлығында Совет Армияһының фашистик Германияның илебеҙгә баҫып инеүенең өсөнсө-дүртенсе көндәрендәге яуы реконструкцияһы күрһәтеләсәк. Бөгөн беҙ тамаша тип кенә ҡараған һәм ҡабул иткән ваҡиғалар аша ватандаштарыбыҙҙың бөйөк ҡаһарманлығы, батырлығы сағылдырыласаҡ. Тамашасылар бер мәлгә генә булһа ла бәйләнеш, һауа һәм артиллерия ышыҡлауы булмаған, хәл-торошто яҡшылап белмәгән, транспорт, ағыулыҡ, запас частар һәм ҡорал етешмәгән шарттарҙа яугирҙарҙың нисек итеп дошмандың һөжүмен кире ҡағыуы, оборона тотоуы менән танышасаҡ. Һуңынан инде "һуғыш" яланынан сыҡҡан "һалдаттар" менән аралашырға, уларға һорауҙар бирергә, уларҙың эшмәкәрлеге хаҡында мәғлүмәт алырға мөмкин буласаҡ. Әйткәндәй, рескontрукцияға сит ҡалаларҙан килеүселәр - барыһы ла энтузиастар. Улар бындай сараларҙа ҡатнашырға үҙ теләктәре һәм үҙ аҡсаларына, йәки бағыусылар ярҙамында йөрөй.

Киске сәғәт етелә Еңеү паркы хәрби йырҙар кисәһенә саҡыра. Унда ветерандар һәм йыйылыусылар гитара, гармун, баянға ҡушылып күңелдәрҙә һәм хәтерҙә мәңгелеккә уйылып ҡалған һуғыш йылдары йырҙарын башҡарасаҡ. Әгәр ветерандар, шулай уҡ теләүселәр, үҙҙәре менән фотоальбомдарын, ут эсенән яҙылған һәм әлегәсә һаҡланған хаттарын алып килһә, был сара ысын мәғәнәһендә Ҡаһарманлыҡ дәресенә әүереләсәк.

Сәғәт киске һигеҙҙә ошонда уҡ "Хәтер майшәме" тип аталған акция башланасаҡ. Уның барышында теләгән һәр кеше майшәм тоҡандыра аласаҡ. Майшәмдәр һуғыш дауам иткән көндәр һанынса - 1418 дана буласаҡ. Уларҙың барыһын да тоҡандырыу өсөн паркка кәмендә мең ярым кешенең килеүе зарур.

Ә шулай ҙа иң тулҡынландырғыс мәл теп-теүәл туғыҙынсы яртыла башланасаҡ. Был мәлдә баш ҡалала ғына түгел, тотош республикала бер минутлыҡ тынлыҡ иғлан ителә. Ошо ваҡытҡа тиклем барлыҡ мәғлүмәт сығанаҡтары халыҡты ошо хаҡта иҫкәртеп торасаҡ. Ә инде тап 20.30 сәғәттә барлыҡ радио һәм телеэфирҙарҙан монометрҙың, юҡ, уның түгел, ә беҙҙең яҡты тормошобоҙ өсөн ғүмерен йәлләмәгән яугирҙарҙың йөрәгенең һуңғы тибеше 60 секунд ауыр тынлыҡты бүлеп тыҡылдағаны, шулай итеп Кешелекте иҫкәртеүе, киләсәк быуындарға Хәтер ебен юғалтмауҙы аманат итеп тылҡыуы ғына ишетеләсәк...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Пиелонефрит һәм һейҙек ташы ауырыуы

❖ Күгүлән (спорыш) үләнен сәй итеп даими (нормаһыҙ) эсергә. ❖ Гөлйемеш тамырынан әҙерләнгән төнәтмә эсергә. 1 ҡалаҡ тамырға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, төнәтергә, йылы көйөнсә эсергә. ❖ Дарыуханаларҙа һатылған "Уролесан"ды көнөнә 3 тапҡыр шәкәргә 15 тамсы тамыҙып эсергә. ❖ Марена красильная үләне тамырын төнәтеп эсергә. Тәүге өс компонентты бер көндө лә ҡалдырмайынса, мотлаҡ 25 көн эсергә. 15-се көндө ҡылысъяпраҡ (сабельник болотный) тамыры төнәтмәһен йәки дарыуханала һатылған "Фитолизин" эсә башларға. 18-се көндән арҡанан бөйөр тирәһенә һуҡҡылап массаж яһарға, шулай уҡ кендек тирәһен баҫҡылап массаж эшләргә. 19-сы көндән бер яҡ бөйөргә 15-20 минутҡа йылытылған тоҙ һалырға. Ике бөйөрҙө лә бер юлы йылытырға ярамай! Быны 25-26-сы көндәргә тиклем дауам итергә. Бер юлы талҡан емеше (толокнянка), репешок, фенхель емештәре, ортосифон үләндәре ҡатнашмаһы төнәтмәһен эсә башларға. Әгәр ҙә был үләндәрҙең барыһын да таба алмаһағыҙ, берәүһен булһа ла төнәтеп эсегеҙ. Дауаланыуҙың аҙаҡҡы ун көнөнә өсөн тәҡдимдәр: 15 минут ваннала ятып торорға. Мунса инеү ҙә яҡшы. Көнөнә 2-2,5 литр туңдырып иретелгән һыу йәки ямғыр һыуы эсегеҙ. Арҡанан бөйөр тирәһенә массаж яһарға. Массаждан һуң эстә ятып торорға. Был ун көн эсендә нимә эшләргә ярамай: күп ашарға, тоҙло, майлы, әсе, итле һәм һөт аҙыҡтары ярамай.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

## Аппетит юғалһа

Сирләгәндә йәки ниндәйҙер стресс булғанда аппетит юғалһа, 1 өлөш әрем үләнен 1 өлөш меңъяпраҡ үләне менән болғатып, 1 ҡалаҡ үләнгә 200 мл ҡайнар һыу ҡойоп, 20 минут төнәтергә. Һөҙөргә, ашарҙан 15-20 минут алда 1 ҡалаҡ эсергә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

**Аҡык име.** Күҙгә аҡ һалһа, аҡыҡ төймә, йөҙөк ҡулланыла. Үткер бысаҡ менән аҡыкты ҡырып, уның онтағын аҡлаған күҙгә һалғандар, һалғанда ошо доғаны уҡығандар:

*Аҡты аҡ алһын, күкте күк алһын,*
*Тфү, тфү, тфү, име-томо шул булһын!*

Күҙ аҡлаһа, уға аҡ һиҙәп ҡырып һалғандар, һалғанда ошондай әпсен әйтелгән:

*Аҡты аҡ алһын, күкте күк алһын,*
*Бар боҙом-сихыр китһен, юғалһын!*

**Ҡыҙыл аҡык име.** Күҙ аҡлаһа, им өсөн ҡыҙыл аҡыҡ ҡулланылған. Уны кешенең баш кейемenә күҙ тапҡырына тегеп ҡуйғандар.

**Аҡ аҡык име.** Аҡ аҡыҡ ап-аҡ ҡабырсаҡ кеүек була. Уны ҡырып, күҙгә һалғандар.

**Аҡлы аҡык име.** Беҙҙең заманда аҡлы аҡыҡ була торғайны. Шуны төйнәйҙәр, доғаһын уҡыйҙар, аҙаҡ бәйләп, ҡулға кейҙереп ҡуялар ине. Ҡырҡ бер төйөн итеп епкә бәйләйҙәр. Ышаныуҙар буйынса, күҙҙең ағы бөтә.

## Күҙгә сүп керһә, им-том

Күҙгә сүп кергәндә дарыу килешмәй. Уға тик имсәк һөтө килешә. Әсә һөтөн һалғас, күҙ төҙәлә, тиҙәр.

**Күҙ әпсене**

*Убыр, күҙем йот, йот,*
*Мәскәй, күҙем йотма, йотма!*
*Убыр, күҙем йот, йот,*
*Мәскәй, күҙем йотма, йотма!*

Һамаҡ менән имләү. Күҙгә сүп төшһә, керпекте тартып, күҙҙе ныҡ итеп асалар ҙа:

*Сөмөкәй күҙем, йот-йот,*
*Сөмөкәй күҙем, йот-йот!* - тип һамаҡлайҙар ине.

**Имсәк һөтө име.** Күҙ ауырығанда күҙгә имсәк һөтөн һауҙырғандар. Ул хәләл һөт, зина белмәҫ ҡатындыҡы булырға тейеш.

Ирҙәр күҙен ҡыҙ тапҡан ҡатын һөтө менән имләгәндәр.

**Төйөн име.** Күҙ ауыртһа, төрлө төҫтәге ептәрҙе бергә һалып, доға уҡып, ҡырҡ төйөн төйнәгәндәр. Шуны беләккә бәйләп ҡуйғандар һәм ауыртыу бөткәнсе йөрөткәндәр. Ҡырҡ төйөн төйнәгәндә ошо әпсенде әйткәндәр:

*Әғүҙү бил-ләһи минәш-шәйтанир-ражими!*
*Бисмилләһир-рахмәнир-рахим,*
*Ҡыр(ы)ҡ төйөн төйәм.*
*Бисмилләһир-рахмәнир-рахим,*
*Аллаһы Тәғәлә шифаһын бирһен!*
*Минән сәбәп булһын.*
*Бисмилләһир-рахмәнир-рахим,*
*Шифа Алланан булһын.*
*Сәбәп минән булһын.*
*Мин сәбәп кенә ҡылайым,*
*Аллаһы Тәғәлә бирһен шифаһын.*
*Бисмилләһир-рахмәнир-рахим,*
*Мин сәбәп кенә ҡылайым,*
*Аллаҡайым бирһен шифаһын.*
*Бисмилләһир-рахмәнир-рахим,*
*Эйе, беҙ сәбәпсе генә булайыҡ,*
*Аллаҡайым бирһен шифаһын.*
*Бисмилләһир-рахмәнир-рахим,*
*Мин сәбәпсе генә булайым,*
*Ауырыуҙың күҙенә*
*Алланан шифа булһын, шифа булһын!*

## Йыланғараҡты имләү

Йыланғараҡ булһа, күҙ ауырта, кеше яҡтыға ҡарай алмай. Уны бөтөрөү өсөн әүәле аждаһа һөйәге баҫҡандар (баҡаны яндырғас, һөлдәһе ҡала, ана шуны аждаһа һөйәге тиҙәр). Баҫҡанда:

*Бисмилләһи, мәр-мер,*
*Бисмилләһи, тәш-түш,*
*Сыҡма, йылан ҡарағы!*
*Һин яман, һин яман,*
*Һинән яман - мин яман! -*
*тип әйтәнең дә төкөрәһең.*

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**

ЙӘШТӘР ҠОРО

# УРМАН МЕНӘН БӘЙЛЕ...

## һайлаған һөнәребеҙ

(Башы 5-се биттә).

➔ **Әгәр ниндәйҙер мөғжизә менән һеҙҙең тәүлеккә тағын бер сәғәт өҫтәп, был ваҡытты иң ҡәҙерле эшкә сарыф итергә тәҡдим итһәләр, һеҙ был 60 минутты ниндәй ғәмәлгә тотонор инегеҙ?**

**Замир:** Ишембай кадет корпусында уҡығанда өс йыл ҡул һуғышы түңәрәгендә шөғөлләнгәйнем, техникумға килгәс тә көрәш секцияһына яҙылдым. Мин былай ҙа буш ваҡытымды спортҡа сарыф итергә тырышам, әлеге өҫтәмә 60 минутты ла, ғәҙәтләнгәнсә, йә көрәшеп, йә йүгереп үткәрер инем, моғайын.

**Альбина:** Ә миңә бындай "бүләк" бирелһә, мин уны мәсьәләләр сисеүгә арнар инем. Математик мәсьәләр сисеү миңә бик оҡшай - уларҙы күпме генә сисһәң дә ялҡытмай. Ғөмүмән, был фәнде мин бөтә донъя халыҡтары аңлай торған тел тип атар инем, музыка һымаҡ ул миңә... Тағы ла, был өҫтәмә ваҡыт эсендә, моғайын, шашка, шахмат уйнар инем. Сөнки, математика менән шөғөлләнеү, уйлау талап ителгән интеллектуаль уйындар уйнау - фекерләүҙе үҫтерергә ярҙам итә.

**Азамат:** Студент саҡта иң "ҡытлыҡ" нәмә, моғайын, йоҡолор ул. Һәр хәлдә, минең өсөн - шулай. Шуға күрә, мин бер сәғәт йоҡлау вариантын ҡулдан ысҡындырмаҫҡа тырышыр инем. Ниңәме? Уҡыуҙан ҡайтҡас, өс сәғәт йоҡлап алам да, ғәҙәттә, эшкә юлланам - төндәрен автомобиль йыуыу урынында эшләйем, бындай режим менән йәшәргә өйрәнеп тә бөтөлдө инде, ауыл балалары бит беҙ, эштән ҡурҡмайбыҙ. Уның ҡарауы, кеҫәлә һәр саҡ аҙмы-күпме ҡулаҡса була.

➔ **Ни өсөн йәмғиәттә спиртлы эсемлектәрһеҙ ял итеү киң таралмаған тип уйлайһығыҙ?**

**Замир:** Дөрөҫ әйтәһегеҙ, бөгөн ҡайһы бер йәштәр байрамдарҙа "ҡыҙып алыу" өсөн һыра һемерә һәм был кире күренештең ыңғайға хәл ителере, ни өсөндөр, күҙалланмай һымаҡ. Алкоголһеҙ ҙә күңел асып була икәнлегенә йәмғиәттең күпселек өлөшө ышанмай, бәлки, был турала ныҡлап уйланмайҙарҙыр.

**Азамат:** Бөгөн күптәр эскелек һаҙлығынан ҡотолорға тырыша, ҡайһы бер йәштәр уны кәрәкмәгән ғәҙәт тип һанай, мин дә улар яғында. Айыҡ тормош - яҡты ла, яҡшы ла, һәүетемсә тыныс та. Әммә айыҡ тормош алып барыу ғына аҙ - спортты ла яратырға кәрәк. Мин, мәҫәлән, спорт менән шөғөлләнгәнгә күрә, бер ваҡытта ла һыуыҡ тейҙереп ауырығаным юҡ.

**Альбина:** Миңә йәштәр байрамдарының спиртлы эсемлектәрһеҙ үткәнен күрергә тура килгәне юҡ, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы. Йәштәр араҡыһыҙ ял итә белмәй, ниңәләр. Нисек көрәшергә был алама ғәҙәткә ҡаршы? Бәлки, эскән кешеләрҙе йәмәғәт эштәренә йәлеп итеү урынлы булмаҫ инеме икән?

**Алһыу:** Йәштәребеҙҙе лә, оло йәштәге граждандарыбыҙҙы ла айыҡлыҡҡа ауҙарыр өсөн, моғайын, иманға килеү талап ителәләр. Һис юғы, әхлаҡ нормаларын тергеҙергә кәрәк. Нисек тергеҙергә - был турала әле баш ватырға ла ватырға...

➔ **Техника үҫә, компьютерҙарҙың яңынан-яңы төрҙәре барлыҡҡа килә. Нисек уйлайһығыҙ, цивилизация алға киткән һайын, йәмғиәттең аңлылыҡ кимәле лә үҫәме?**

**Замир:** Ни өсөндөр, миңә элекке заман кешеләре изге күңеллерәк, әхлаҡлыраҡ булып тойола. Советтар Союзы тәрбиәләгән балалар - бөгөнгөололар - быға асыҡ миҫал. Ләкин үҙ заманында ошондай тәрбиә алһалар ҙа, бөгөнгө ата-әсә үҙ балаларын әхлаҡ нормаларына тоғролоҡ һаҡлап тәрбиәләмәй. Әхлаҡлы булыу - модала түгел һымаҡ тойола.

**Альбина:** Беҙ техникумға трамвайҙа йөрөйбөҙ. Трамвайҙың трамвайында бөгөнгө ысынбарлыҡ асыҡ ярылып ята - күп йәштәр, күҙҙәренә ҡара күҙлек элеп, ҡолаҡсын кейеп алалар ҙа, ололарға ла, ҡатын-ҡыҙға ла урын бирмәй, уларҙы күрмәмеш булып, ултырғыста "төнәй"ҙәр. Кеше хәҙер бәғерһеҙгә әйләнде. Йәштәрҙе генә әрләргә ярамайҙыр, бәлки. Бәлки, йәмғиәт ғәйепле, ә бәлки, техника үҫешелер, ҡапыл-ғара әйтеүе ауыр.

**Азамат:** Кемдәр әхлаҡлылыҡ тураһында уйлана, шул үҫә, ә кем уйланмай - үҫмәйҙер, минеңсә. Советтар Союзы ваҡытында кешеләр араһында социаль тигеҙһеҙлек булмаған, шуға бер-беренә ыңғай мөнәсәбәт һаҡланған. Бөгөн социаль тигеҙһеҙлек айырым-асыҡ һиҙелә, шуға бөгөн кешеләр татыу йәшәмәй. Әхлаҡлылыҡ кәмемәгән дә, артмаған да, тип уйлайым, сөнки, көн менән төн балансы тигеҙ һаҡланған һымаҡ, йәмғиәттә лә тигеҙлек барҙыр ул.

➔ **Кешелек тарихында ҡасандыр йәшәгән берәй кеше менән осрашырға мөмкинлек бирелһә, кем менән осрашыр инегеҙ?**

**Альбина:** Мин, моғайын, Суворов менән осрашыр инем. Уның "Тяжело в учении, легко в бою" тигән һүҙҙәре генә ни тора! Уның лидер булыуы, етәксе натураһы ҡыҙыҡһындыра мине. Миңә лидерҙар оҡшай. Кем булған ул, ни өсөн тап ошондай кеше юғарылыҡына барып етә алды икән - шул һорауҙарға яуап эҙләр инем.

**Алһыу:** Мин халҡыбыҙҙың милли геройы Салауат Юлаев менән осрашырға теләр инем. Сөнки ул шәхес булараҡ та башҡа кешеләргә оҡшамаған. Ул халҡыбыҙҙың рухы. Шағир булараҡ та ныҡ оҡшай ул миңә, сөнки мин үҙем дә шиғырҙар яҙырға яратам. Уның менән һөйләшкән ваҡытта, уның үҙ алдына йырлап барыуын, күңеле тулышып ҡурай уйнауын һәм, әлбиттә, уны ғашиҡ иткән Урал тәбиғәтен бер генә тапҡыр булһа ла күрергә теләр инем.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөгөнгө ҡунаҡтарыбыҙ - Урман хужалығы техникумынан бер төркөм студенттар менән тағы ла экология темаһына ла, һуғыш һәм тыныслыҡ тураһында ла, мөхәббәт һәм йәшлек хаҡында ла әңгәмәләшкәйнек. Гәзитебеҙ биттәрендә тап бөгөнгө темаларҙы яҡтыртыуыбыҙҙың төп сәбәбе, бәлки, был һорауҙарҙың уларға ныҡыраҡ тәьҫир итеүендәлер. Ни тиһәң дә, бөгөн күтәрелгән һорауҙар, моғайын, һеҙҙе лә борсой торғандыр.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ әңгәмәләште.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# СТУДЕНТТАР ДУҪЛЫҒЫ

**Ә һеҙ беләһегеҙме, нимә ул академик мобиллек? Академик мобиллек - билдәле ваҡыт эсендә студенттарҙың һәм уҡытыусыларҙың уҡыу, уҡытыу йәки фәнни тикшеренеүҙәр маҡсатында бер уҡыу йортонан икенсе уҡыу йортона күсеп йөрөү мөмкинлеге. М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты студенттарына һәм уҡытыусыларына ла хас был күренеш.**

Күптән түгел университеттың башҡорт филологияһы факультеты студенттары шундай мөмкинлек менән файҙаланды: ҡасандыр бөйөк мәғрифәтсебеҙ М. Аҡмулла йөрөгән ерҙәрҙә - Ҡаҙағстанда, Аҡтүбә ҡалаһында, стажировка үттe. Доцент М.С. Дәүләтшина етәкселегендәге ете студент ҡыҙ Ҡ. Жубанов исемендәге Аҡтүбә дәүләт университетында белемен камиллаштырып, тәжрибә туплап, уңыштар яулап ҡайтты. Көн һайын ҡаҙаҡ профессорҙарынан төрлө темалар буйынса һабаҡ алыу бәхете тейҙе. Беҙҙең етәксебеҙ М. Дәүләтшина ҡаҙаҡ студенттарына "Башҡорт йәнле һөйләү теле" курстарын үткәреп, шулай уҡ уларҙың хөрмәтен яуланы.

Бер аҙналыҡ сәйәхәтебеҙҙең төп маҡсаты - "Ҡаҙаҡ һәм башҡорт халҡының йолаларын һәм ғөрөф-ғәҙәттәрен телдә сағылдырыу" һәм "Донъя тел картинаһы" темалары буйынса ғилми мәҡәләләрҙе яҡлап, конференцияла сығыш яһау ине. Беҙ ҡаҙаҡ студенттары менән бергә башҡорт һәм ҡаҙаҡ телдәренең үҙенсәлектәрен сағыштырма планда өйрәндек: оҡшашлыҡтар һәм айырмалы яҡтарҙы тикшерҙек. Ғилми эштәр конкурсында беренсе урынға беҙҙең башҡорт филологияһы факультетының 4-се курс студенты Йомаева Әлфиә лайыҡ булды. Икенсе урынды 3-сө курс студенты Харрасова Элмира менән бергә Ҡ. Жубанов исемендәге Аҡтүбә дәүләт университеты студенты бүлеште. 3-сө урынды башҡорт филологияһы факультетының 3-сө курс студенты Әхмәҙиева Гөлшат һәм ҡаҙаҡ филологияһы факультетының икенсе студенты яуланы.

"Яҙғы триместр-2013" программаһы буйынса планлаштырылған стажировка хәҙер иһә беҙҙең Башҡорт дәүләт педагогия университетында дауам итә. 10 июндә Аҡтүбә уҡыу йортоноң һигеҙ студенты етәкселәре менән берлектә беҙҙең факультетҡа стажировка үтергә килде. Улар ҙа шулай уҡ факультетыбыҙҙа төрлө курстарҙа уҡыйҙар, ә беҙ уларҙы Өфөнөң матур урындары менән таныштырабыҙ, музейҙарға йөрөтәбеҙ.

**Юлиә ҒӘЛИӘСКӘРОВА, БДПУ студенты.**

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# "УРАЛ БАТЫР" ЭПОСЫ ҺӘМ...

## Боронғо Греция мифтары араһында ниндәй уртаҡлыҡ бар?



**Башҡорт халҡының "Урал батыр" эпосы менән зороастризмдың "Авеста"һы, шумерҙарҙың "Ғилгәмеш тураһында иртәк" әҫәре араһындағы оҡшашлыҡтар тураһында танылған ғалим-археолог Нияз Мәжитов, тарихсы Салауат Ғәлләмовтар белдергәйне инде. Элегерәк "Урал батыр"ҙың "Тәүрат" текстарының ҡайһылыр урындары менән тап килеүен дә билдәләгәйнек.**

Археологик тикшеренеүҙәр зороастризмға хас булған ерләү йолаһы Уралда иртәрәк, беҙҙең эраға тиклем II меңъйыллыҡтың башында, Абаш мәҙәниәте вәкилдәре араһында йәшәгәнлеген раҫлай. Ә "Урал батыр" тексында яңы гөрөф-ғәҙәттәр һәм инаныуҙар тараҡҡан өсөн ҡәбиләһенән ҡыуылған бәйғәмбәр тураһында һүҙ бар. Был зороастризм бәйғәмбәре Заратуштраның яҙмышы менән тулыһынса тап килә. Текста иҫкә алынған еҙ һандыҡ - дәүерҙе - еҙ быуатты, бронза дәүеренең башланыуын билдәләй.

"Авеста"ға ярашлы, Заратуштра бәйғәмбәрҙең атаһы Порушаспа була. Уның исеме Атҡа бай тигәнде аңлата (аспа - фарсы теленән тәржемә иткәндә ат тигәнде аңлата). Күп атлылыҡ ишәккә бай Иранға йәки Урта Азияға ҡарағанда, Уралға нығыраҡ хас, улар бында ҡырағай тәбиғәттә күпләп йөрөгән. Был исемдең боронғо башҡорт аналогы ла бар - Йылҡыбай. Тәүҙә зороастрийҙарҙың изге эсемлеге Хаома һөт сығанаҡлы булған. Ул башҡорт телендә "һаумал" тип аталған йәш ҡымыҙға тап килә.

"Урал батыр" эпосында зороастрийҙарҙың кешене ҡорбанға килтереү йолаһы - мәйеттәрҙе оҙаҡ ерләмәй тороу (һөйәк тауҙары), шулай уҡ батшаның зороастрий тотемы булған ҡарғаға табынысусы Ҡатил батша иле тураһында бәйән ителә. Зороастризм, дини тәғлимәт булараҡ, башҡорттарҙың боронғо ата-бабалары араһында ассимиляцияға бирелгән Абаш мәҙәниәтен йөрөтөүселәр мөхитендә Көньяҡ Уралда тыуған тип әйтергә нигеҙ бирә. Шуға ярашлы, "Авеста"ның ҡайһы бер урындары (Заратуштраның яҙмышы) "Урал батыр" эпосынан һәм башҡорттарҙың гөрөф-ғәҙәттәренән (Хаома - ҡымыҙ) алынған, тип тә раҫлап була.

"Урал батыр" эпосының тексы менән "Тәүрат" араһында ла тап килеүҙәр бар. Мәҫәлән, эпоста ике тапҡыр һыу баҫыу һәм кешеләрҙең ҡалҡыу урындарҙа йәки тау баштарында ҡотолоп ҡалыуы бәйән ителә. Әйткәндәй, тәбиғәттең был күренеше мезолит дәүерендә Уралда күҙәтелә, климаттың йылыныуы һөҙөмтәһендә ерҙе ҡаплаған боҙлоҡ ирей һәм һыу ҡоро ерҙе баҫа, йә ҡабат ҡайта һәм ҡабат баҫа. "Тәүрат" яҙылған Яҡын Көнсығышта бындай күренештәр булмаған, тимәк, был "Тәүрат"тағы бөтөн донъя һыу баҫыу тураһындағы мифтың икенсе сығанаҡтан алыныу мөмкинлеге хаҡында һөйләй. Шул уҡ ваҡытта, "Урал батыр" - боронғо сығанаҡтарҙан һыу баҫыуҙы тәбиғәт күренеше тип һүрәтләгән берҙән-бер сығанаҡ. "Тәүрат"та бөтөн донъя һыу баҫыуы, һабаҡ булараҡ, күрәһең, кешеләрҙең гонаһы өсөн Аллаһы Тәғәләнең яҙаһы итеп һүрәтләнә һәм был изге яҙманың стиленә, уның рухына тулыһынса тура килә.

Бөтөн донъя һыу баҫыу һәм кешеләрҙең ҡалҡыу урындарҙа һәм тау баштарында ҡотолоп ҡалыуы тураһындағы мифтан тыш, "Тәүрат"тың башҡа ҡанундарына ла тап килеүҙәр бар. Мәҫәлән, Аллаһ Тәғәлә тарафынан ашарға яраҡлы, ризыҡ өсөн ҡулланырға яраҡлы хайуандарға ҡағылышлы юлдар. "Тәүрат" буйынса, был хайуандар айыры тояҡлы, уларҙа тәрән ярыҡ булырға һәм улар көйшәргә тейеш. Эпосҡа ярашлы, Урал батыр үгеҙҙе еңгәс, уны шундай итеп ергә батыра, хатта уның тояҡтары ярыла, унан күпләп ҡан аға башлай һәм ярыҡтарға ҡом тула. Һорау тыуа: ә үгеҙ Урал менән алышҡанға тиклем ҡуш тояҡлы булғанмы ни? Юҡ, әлбиттә. Тимәк, эпостың был юлдарына икенсе төрлө мәғәнә һалынған. Эпостың үгеҙҙең тояҡтарын көс менән айырыу тураһындағы өлөшө был тотемдың ризыҡ әҙерләү өсөн ҡулланырға яраҡлы ябай хайуан рәтенә төшөүен символлаштыра. Был "Тәүрат"тың кешеләрҙең Аллаһҡа ярарға тырышыу ҡылығына ҡағылышлы иң мөһим ҡанундарының береһе. Һәм уның "Урал батыр" эпосы менән бәйләнеше эпостың йөкмәткеһе Яҡын Көнсығышта Тәүратты яҙған ваҡытта уҡ (беҙҙең эраға тиклем XIII-VIII быуаттар) билдәле булыуы тураһында һөйләй.

Эпостың Уралдан Яҡын Көнсығышҡа нисек тапшырылыуының мөмкин булған юлдары ла билдәле. Уны абаш-арийҙар килтергән. Тәүратта уларҙың баҫҡынсылығы һәм йәһүдтәрҙе мәйет ерләү йолаһына түҙергә (мәйетте ете ай буйына ерләмәгәндәр) мәжбүр итеүҙәре тураһында ла әйтеп кителә. Бындай ҡуҙаллау Уралда Урта дингеҙҙә лә, Яҡын Көнсығышта ла билдәле булған ҡеүәтле дини үҙәктең булыуын нигеҙләүҙе талап итә. Ысынлап та, Геродот (беҙҙең эраға тиклем V быуат) үҙенең "Тарих"ында йөҙҙән ашыу халыҡты иҫкә алып, бары тик Уралда йәшәгән боронғо аргиппейҙарҙы ғына изге халыҡ, ә Урал арьяғындағы исседондарҙы - хаҡ динле тип атаған. Шуның менән ул уларҙың хатта Урта дингеҙҙә лә билдәле булған динилеген билдәләгән. Бында тағы ла археологтар тарафынан Һынташ ҡәберлегендә табылған, нигеҙендә көмбәҙ ҡорамы булған туғыҙ баҫҡыслы пирамиданы ла өҫтәргә кәрәк. Арҡайымда ваҡытлыса хаж ҡылыусыларҙан торған халыҡ йәшәгән. Зороастрийҙар был урындарҙы Йыһандың үҙәге тип иҫәпләгән. Уларҙың изге "Авеста"һында (Ҙур Бундахишн) былай тиелә: "Ахура-Мазданың дүртенсе ижады булып үҫемлектәр тора. Бишенсе итеп ул, Ахура-Мазда, Арьян-Вэджала... Даитьи (Яйыҡ, Урал, **- Авт.**) йылғаһы буйында, Ер донъяһының үҙәгендә беренсе Үгеҙҙе барлыҡҡа килтерә. ... Һәм Ахура-Мазданың бишенсе ижады булып Арьян-Вэджала, Даитьи ярында, Беренсе кеше - Гайа Мартан булдырылған".

Филиппов ҡурғандарында Мысыр фараондары ерләнгән ҡәберлектәрҙәге байлыҡҡа тиң алтын тотемдар табылыуын да иҫкә алырға кәрәк. Бында Тәңреселек тип аталған боронғо дин формалаша һәм унан зороастризм бүленеп сыға. Ә һәр дин үҙенең изге хикәйәтенә йәки эпос формаһындағы яҙмаһына эйә һәм уларҙа боронғо тарихи ваҡиғалар мифҡа әүерелә.

Былар барыһы бергә беҙҙең эраға тиклем II меңъйыллыҡ уртаһында Урал арьяғында, хәҙерге Иерусалим, Мәккә һәм Мәҙинә кеүек, донъя кимәлендәге дини үҙәк булғанлығын раҫлай. Тап шунда, төбәктә булған ысынбарлыҡтағы тарихи хәл-ваҡиғаларға бүленгән дини мифтар тупланмаһы булараҡ, "Урал батыр" эпосы тыуған. Ә Арҡайымда булған мендәрсә хаж ҡылыусылар, сәйәхәтселәр һәм сауҙагәрҙәр был мифтарҙы бөтөн ойкумен буйынса тараҡҡан. Арҡайым һәм Һынташ ингән был үҙәк һәм "Калалар иле" хаҡында хатта беҙҙең эраның башында ла белгәндәр. "Гиперборей һәм Аримасп ҡалалары ... хаҡ динлеләрҙең йәшәү урыны", тип яҙған грек-рим философы Тит Флавий ошо ҡалаларҙың боронғолого менән динилектең белемдән өҫтөн булыуын раҫларға тырышҡан.

"Урал батыр" эпосының сюжеттарының шулай дини хикәйәттәрҙә һәм яҙмаларҙа киң таралыуы дини үҙәктең ысынбарлыҡ булыуын һәм Геродот тарафынан башҡорттарҙың боронғо ата-бабалары аргиппейҙарҙы изге кешеләр итеп айырып күрһәтеүен иҫкә алғанда, "Урал батыр" эпосының үҙаллы барлыҡҡа килеп үҫешеүен раҫларға мөмкин. Ошо концепцияға бәйле был хеҙмәттә "Урал батыр" эпосы сюжеттарының Боронғо Греция мифтары менән оҡшашлығы һәм уларҙың Көньяҡ Уралдан Эгей дингеҙе ярҙарына барып сығыу юлдары ҡарала.

**Радик ВАХИТОВ.**
**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Башҡорт аттарына махсус тәрбиә булмаған. Ҡолондар тыуыу менән урамда тотолған. Урман һәм ялан-урман өлөшөндә улар йыл әйләнәһенә тибендә йөрөгән, ҡайһы берҙә хатта ҡалын ҡар аҫтынан да үҙҙәренә аҙыҡ тапҡан. Бындай ваҡыттарҙа улар өсөн бейек үҫкән үҫентеләр, мәҫәлән, ҡылған, төп аҙыҡ булып торған. Көн буйына дала ҡыҙырып, көтөүсеһеҙ йөрөгән аттар төнгөлөккә елһеҙ урынға барып тупланған һәм бүреләрҙең һөжүмен кире ҡағыу маҡсатынан түңәрәк яһап торған.

Башҡорттар аттарҙы хәрәкәт итеү сараһы булараҡ ҡына түгел, уларҙың ите, һөтө өсөн тотҡан. Һәм йылҡысылыҡ продукттары уларҙың төп аҙығы булып торған, ә тиреһенән кейем-һалым теккәндәр һәм һауыт-һаба эшләгәндәр, ялынан еп яһағандар, уны тегенселектә файҙаланғандар.

Эре малдарҙы башҡорттар сағыштырмаса әҙерәк тотҡан; йәйләүгә сыҡҡанда уларҙың һаны аттарҙыҡына ҡарағанда ике-өс тапҡырға кәмерәк булған, күпселек осраҡта бер ғаиләгә бер-ике һауын һыйыры тура килгән.

Эре малдың да, аттар кеүек үк, йәше һәм енесе буйынса номенклатураһы эшләнгән. Т. Г. Байышев бынан тыш малдарҙың тыуған ваҡытына ла иғтибар иткән. Мәҫәлән, яҙын тыуған малдар быҙау тип аталған. Енесенә ҡарап, улар үгеҙ быҙау һәм орғасы быҙауға бүленгән. Йәйгеһен тыуған мал - сәңгәр (үгеҙ сәңгәр, орғасы сәңгәр); көҙгөһөн донъяға килгәне - һараяҡ (үгеҙ һараяҡ, орғасы һараяҡ). Яҙғыһын тыуып, көҙгәсә йөрөгән һәм бер йәшкә тиклемге быҙау башмаҡ тип аталған; йәйгеһен - сәңгәр башмаҡ, көҙгөһөн - һараяҡ башмаҡ. Бер йәштән ике йәшкә тиклем эре йәш мал үгеҙ тана йәки орғасы тана тип йөрөтөлгән.

Ике йәштән өс йәшкә тиклемге үгеҙ - ҡонан үгеҙ, өс йәштән дүрт йәшкә тиклемгеһе - дүнән үгеҙ, дүрт йәштән олоһо - үгеҙ, бестерелгәне беселгән үгеҙ тип аталған.

Ике йәштән алып икенсе тапҡыр быҙаулағанға тиклемге орғасы - тана һыйыр, артабан инде үлгәнгә тиклем һыйыр тип йөрөтөлгән. Бер тапҡыр ҙа быҙауламаған орғасы - тыуса, түлһеҙ - тыу һыйыр, сираттағы быҙаулау ваҡытында быҙауламағаны ҡыҫыр һыйыр булған.

Башҡорт һыйырҙары тоҡомо ҡатнаш була, улар төрлө төҫтәге азиат, атап әйткәндә, ҡаҙаҡ тоҡомонан, шулай уҡ урындағы һыйырҙарҙың рус тоҡомонан да бер нәмәһе менән дә айырылмаған. Был аңлашыла ла, сөнки борон-борондан (беҙҙең эраға тиклем икенсе мең йыллыҡ) Башҡортостанда эре һәм ваҡ тоҡомло һыйырҙар була. Ә боронғо тарихтан күренеүенсә, Көнсығыш менән дә, Көнбайыш менән дә эре мал менән алмашыу бик әүҙем бара. Башҡорт һыйыры уртаса буйлы, хатта бәләкәйерәк, килбәтһеҙерәк, башы түбән эйелгән, туҙғыған тупаҫ йөнлө, саманан тыш итле лә, һөтлө лә түгел, май ҡатламы запасы тупламаусан була. Ялан районында XVII - XVIII быуаттарҙа эре мал ҡыш башында аттар менән бергә тибендә йөрөгән, XIX быуаттың икенсе яртыһынан, беҙгә мәғлүм булыуынса, ҡышын ауылдарҙа ҡураларҙа тотолған.

***✓ РФ гражданлығы булмаған сит ил граждандарын ил территорияһына үткәреүҙе ойошторған өсөн 300 мең һумға тиклем штраф һалыу, ике йылға тиклем хоҡуҡ төҙәтеү эштәре, йәки өс йылға тиклем мәжбүри эшләтеү ҡаралған.***

# ЙЫЛЫ ЯҠҠА

**миграция**

**Федераль миграция хеҙмәте идаралығының Башҡортостан Республикаһы буйынса начальнигы, Рәсәй Федерацияһының 3-сө класлы дәүләт советнигы Борис Миҙхәт улы ҒӨЗӘЙЕРОВтың тормош юлына күҙ һалһаң, ул һәр ваҡыт кеше яҙмыштарының һынылышлы мәлдәренә - бер халәттән икенсе халәткә, бер урындан икенсе урынға, бер сифаттан икенсе сифатҡа, бер кисерештән икенсе кисерешкә күсеүенә шаһит булып эшләгән һәм йәшәгән һымаҡ. Борис Миҙхәт улы белеме буйынса юрист, оҙайлы йылдар прокуратура системаһында хеҙмәт итә, ә 2009 йылдан миграция хеҙмәтен етәкләй. Бай тормош һәм профессиональ тәжрибә туплаған юристың үҙ әңгәмәһен бала саҡ хәтирәләренән, үҙе уҡыған 1-се республика интернат-мәктәбен иҫкә алыуҙан башлап ебәреүе һис тә осраҡлы түгел. Миграцияға тарихи юҫыҡтан ҡарашы ла үҙенсәлекле. Үҙен тыңлайыҡ.**

## Тормошта осраҡлыҡтар булмай

Хәҙерге Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатына уҡырға килеүем яҙмышымды билдәләүҙә ҙур роль уйнаны. Унда уҡыусыларҙың 98-99 процентының юғары белем алыуын күҙ уңында тотҡанда ла, күпме яҙмыштарҙың ынғай йүнәлеш алыуын төҫмөрләргә булалыр, тием. Әгәр ҙә ошо интернат-мәктәпкә уҡырға килмәгән булһам, бәлки, яҙмышым икенсе йүнәлеш алыр ине. Мәҫәлән, мин тыуған ауылымда, Мәсетле районының Һөләймән мәктәбенең 3-4 кластарында уҡығанда мәктәп-интернаттың барлығы хаҡында белмәй ҙә инем әле. Өфөгә юлланыуыма атайымдың ағаһы Баҡый бабайым (ул Өфө авиация техник университеты ректоры, фән докторы Морат Ғөзәйеровтың атаһы) сәбәпсе булды. Баҡый бабайым Бөйөк Ватан һуғышында ҙур батырлыҡтар күрһәтә, майор дәрәжәһенә, полк командары урынбаҫарына тиклем батырлыҡ һәм командирлыҡ мәктәбе үтә. Ауылға отпускыға ҡайтҡан сағында ул ҡапыл ғына мине Өфөләге бер һәйбәт мәктәпкә уҡырға алып китәсәге хаҡында белдерҙе. Шунан Өфөгә алып килеп, интернат-мәктәпкә урынлаштырҙы. Яҙмышымдың былдай боролошон мин осраҡлы күренешкә һанамайым, сөнки, ғөмүмән, тормошта осраҡлыҡтар булмайҙыр, тип иҫәпләйем.

## Мигранттарҙың хеҙмәт нисбәте

Мәктәптә уҡығанда минең иң яратҡаным тарих дәресе ине. Аҙаҡ та мин тарих менән ҡыҙыҡһыныуҙан туҡтаманым. Был ҡыҙыҡһыныуым тормошта ла, әлеге эшемдә лә ярҙам итә. Мәҫәлән, ниңә кеше бер урындан икенсе урынға күсеп йәшәргә ярата? Кешелек тарихында барлығы дүрт тапҡыр халыҡтарҙың бөйөк күсенеүе күҙәтелгән. Ул саҡта дәүләттәр, дәүләттәрҙең сиктәре лә булмағанға күрә, күсенеүҙәр хаотик рәүештә килеп сыҡҡан. Хәҙерге шарттарҙа быңдай күсенеүҙәргә дәүләттәрҙең сиктәре, ҡоралды көстәре ҡамасаулай. Икенсенән, халыҡтарҙың бер ерҙән икенсе ергә, бер дәүләттән икенсе дәүләткә күпләп күсенеүенә хәҙерге ваҡытта тәбиғәт катаклизмдары, донъя һуғыштары ғына сәбәп булыуы бар. Әммә беҙ был осраҡта "Аллам һаҡлаһын!" тип әйтеп өйрәнгәнбеҙ.

Хәҙерге ваҡытта ундай күсенеүҙәр миграция менән алышынды. Миграция теге йәки был илдең иҡтисадына, йәшәү шарттарына бәйле. Әгәр ҙә бөгөн бер илдә йәшәү шарттары насарлана икән, ул илдең граждандары көн итеү хаҡына башҡа дәүләттәргә сығып, төрлө эштәр башҡарырға, ошо юл менән үҙҙәренең ғаиләләрен аҫырарға мәжбүр. Мәҫәлән, аслыҡ йылдарында беҙҙең күп кенә яҡташтарыбыҙ Урта Азияға сығып киткән. Бөгөн уларҙың балалары, ейән-ейәнсәрҙәре атайсалына кире ҡайта. Статистика буйынса хәҙер 30 миллион самаһы урыҫ милләте вәкиле сит илдәрҙә йәшәй. Уларҙы кире ҡайтарыу буйынса махсус программа ҡабул ителгән.

Беҙҙең республикала ла мигранттар бар. Әммә улар беҙҙең иҡтисад үҫешенә һиҙелерлек өлөш индерә тип әйтмәҫ инем. Юғиһә, гастарбайтерҙар беҙҙең төп эшсе көстәрҙе тәшкил итә, тиеүселәр ҙә бар. Был дөрөҫлөккә тура килмәй, сөнки улар беҙҙең иҡтисадҡа ни бары 0,3 процент ҡына өлөш индерә. Ул ғына нисбәт менән беҙҙең иҡтисадты күтәреп тә, төшөрөп тә булмай. Статистика буйынса Мәскәүҙә һәм башҡа өлкәләрҙә сит ил граждандары тарафынан бик күп енәйәт ҡылынһа, беҙҙә иһә барлыҡ енәйәттәрҙең 0,1 процентын ғына сит ил граждандары атҡара.

Мигранттарҙың иң күбеһе хәҙерге ваҡытта беҙҙә төҙөлөштә һәм ауыл хужалығында эшләй. Уларҙы йәшелсә үҫтереүселәр ҙә эшкә яллай. Бөгөн сит ил граждандары күберәк Туймазы, Октябрьский ҡалалары янындағы, Шаран районындағы теплицаларҙа хеҙмәт итә. Төҙөлөшкә килгәндә, улар юғары квалификация талап ителмәгән төрлө эштә ярҙамсы эшсе вазифаһын башҡара. Шул уҡ ваҡытта сит ил граждандарын эшкә яллаусылар улар менән хеҙмәт килешеүе төҙөргә бурыслы. Бының өсөн уларҙың ҡулында федераль миграция хеҙмәте биргән патент булыуы мотлаҡ. Әгәр ҙә ошо шарттар үтәлмәһә, эшкә яллаусыларға штраф санкциялары, башҡа төрлө яҙа ҡарала.

## Закондарға төҙәтмәләр

Мигранттар беҙгә килеп, үҙебеҙҙең граждандарҙың эш урындарын яулай, уларҙың ауыҙынан ризығын тартып ала, тигән дөрөҫ булмаған ҡараш та йәшәй. Беҙгә килеүселәр хатта аҙ ғына эш хаҡы түләнгән түбән квалификациялы, беҙҙекеләр "бысраҡ" тип ҡараған эшкә лә ҡушҡуллап риза. Улар өсөн иң мөһиме - эш кенә булһын. Ни өсөн тигәндә, улар үҙ дәүләттәрендә быңдай эште таба алмай, икенсенән, әйтәйек, мигрант Урта Азия республикаһынан икән, беҙҙә эшләп тапҡан 5 мең аҡсаһы, үҙҙәрендәге аҡса берәмегенә әйләндергәндә, байтаҡ сумманы тәшкил итә. Беҙ долларға, евроға нисек ҡараһаҡ, улар Рәсәй һумын шулай күрә. Намыҫһыҙ эш биреүселәр ҡайһы ваҡыт уларҙың ошондай хәле менән файҙалана. Әммә беҙҙең хеҙмәт уларҙың үҙ-ара мөнәсәбәтенә юридик яҡтан ҡыҫыла алмай, беҙ мигранттарға бары тик патенттар, хеҙмәткә рөхсәт ҡағыҙҙары ғына бирәбеҙ. Хеҙмәткә рөхсәт квоталар нигеҙендә бирелә, ә квоталар эш урындарына ҡарап билдәләнә. Шуға күрә лә сит ил граждандары үҙебеҙҙекеләрҙең ауыҙынан икмәген тартып ала, тигән фекер дөрөҫлөккә тап килмәй.

2012 йылда беҙҙең эшмәкәрлеккә бәйле закондарға бер нисә төҙәтмә индерелде. Шуларҙың бер нисәүһен әйтеп китеү урынлы булыр, тием:

**Беренсенән**, беҙҙең ил территорияһында оҙайлы ваҡыт йәшәүселәрҙең хоҡуҡи статусын яйға һалыуға йүнәлтелгән үҙгәрештәр индерелде. Ул граждандар ваҡытлыса йәшәр өсөн рөхсәте, тороу өсөн таныҡлығы булмаған хәлдә лә ябайлаштырылған тәртиптә Рәсәй Федерацияһы гражданы була ала. РФ гражданлығы алыуҙың был льготалы тәртибе 2017 йылдың 1 ғинуарына тиклем дауам итә. Ә инде үҙ статусын яйға һалмаусылар үҙ илдәренә ҡайтарыласаҡ.

**Икенсенән**, 2012 йылдың 1 декабренән Рәсәйҙең торлаҡ-коммуналь хужалыҡ, көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү һәм сауҙа өлкәләрендә хеҙмәт итеү маҡсаты менән килеүсе сит ил граждандары мотлаҡ рәүештә рус телен белергә һәм был хаҡтағы документы булырға тейеш. Сит ил граждандарына рус телен уҡытыу һәм тейешле документ биреү менән Башҡорт дәүләт университеты, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты һәм Өфө авиация техник университеты шөғөлләнә.

**Өсөнсөнән**, миграция закондарын боҙған өсөн РФ Енәйәт кодексына күп кенә төҙәтмәләр индерелде. 322-се статьяға ярашлы, РФ сик һыҙығын закөнһыҙ рәүештә үткән өсөн штрафтан тыш ике йылға тиклем мәжбүри эшләтеү һәм шул уҡ срокҡа тиклем иркенән мәхрүм итеү ҡаралған. Шулай уҡ 322-се статъяның 1-се пунктына ла үҙгәрештәр индерелде. Уға ярашлы, РФ гражданлығы булмаған сит ил граждандарын ил территорияһына үткәреүҙе ойошторған өсөн 300 мең һумға тиклем штраф һалыу, ике йылға тиклем хоҡуҡ төҙәтеү эштәре, йәки өс йылға тиклем мәжбүри эшләтеү, йәки биш йылға иркенән мәхрүм итеү ҡаралған.

Шуны ла оноторға ярамай, РФ президенты "РФ айырым закон акттарына үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы Федераль закон проектын Дәүләт Думаһына тәҡдим итте. Унда теркәлеү урынында йәшәүсе РФ граждандары һәм мигранттар өсөн дә берҙәй үк закон ҡатылығы сағылыш тапҡан. Әйтәйек, законды боҙоу юлы менән беҙҙең илгә ингән сит ил граждандарына йәшәргә урын биргән өсөн хужалар ҙа яҙаға тарттырыласаҡ.

## Халыҡ ауылда арта

Беҙҙең халыҡ, асылда, ауыл иҫәбенә арта. Ауылда балалар ҡалаға ҡарағанда күберәк тыуа, икенсенән, ауылда тыуып үҫкән кешенең һаулығы ла нығыраҡ була. Һуғыштан һуң илебеҙ халҡының һан буйынса аҙ ғына ваҡыт арауығында кире тулыланыуында ла ауылдарҙың роле иҫ киткес ҙур булды. Бына чечендар, мәҫәлән, үҙҙәрендәге һуңғы һуғыш ваҡытында 600 меңгә тиклем кәмеһә, бөгөн уларҙың һаны миллион ярымға яҡынлаша. Улар, дөрөҫөн әйткәндә, ун биш йыл эсендә шунсамаға тиклем артты. Быға улар, асылда, ауылдарындағы тыуым иҫәбенә өлгәште. Бөйөк Ватан һуғышынан һуң беҙҙә лә шулай булған, йәғни ауылдарҙағы һәр ғаиләлә 7-10 бала аҫырағандар. Ҡалаларҙа 10 балалы ғаиләләр хаҡында бөтөнләй ишеткәнем юҡ.

Һуңғы ваҡытта ауылдарҙа эш урындары булмауы урбанизация процесын көсәйтеп ебәрҙе. Хәҙер техниканың ныҡ үҫешкән сағында, бәлки, элекке һымаҡ, ауылдарҙа күп халыҡтың йәшәүе лә талап ителмәйҙер, әммә халыҡ һанының артыуын, кәмемәүен тәьмин итеү маҡсатында беҙгә ауылдарҙы ла һаҡларға кәрәк. Һуңғы ике йыл эсендә күп кенә ауыл халҡы ситкә китте. Улар Себергә, Мәскәү, Санкт-Петербург ҡалаларына барып, еңел генә эшкә урынлаша. Сит илдәргә, Европа дәүләттәренә китеүселәр ҙә йылдан-йыл күбәйә. Ханты-Мансы, Төмән өлкәләренә эшкә китеүселәр ҙә күп. Халыҡтың күпләп артыуына, асылда, ауыл булышлыҡ итеүен иҫәпкә алғанда, ауылды һаҡлауға, үҫтереүгә мөнәсәбәт тә ҡырҡа үҙгәрергә тейеш, тигәнде аңлата был хәл.

***Һуңғы ваҡытта ауылдарҙа эш урындары булмауы урбанизация процесын көсәйтеп ебәрҙе. Хәҙер техниканың ныҡ үҫешкән сағында, бәлки, элекке һымаҡ, ауылдарҙа күп халыҡтың йәшәүе лә талап ителмәйҙер, әммә халыҡ һанының артыуын, кәмемәүен тәьмин итеү маҡсатында беҙгә ауылдарҙы ла һаҡларға кәрәк. Һуңғы ике йыл эсендә күп кенә ауыл халҡы ситкә китте. Улар Себергә, Мәскәү, Санкт-Петербург ҡалаларына барып, еңел генә эшкә урынлаша. Сит илдәргә, Европа дәүләттәренә китеүселәр ҙә йылдан-йыл күбәйә. Ханты-Мансы, Төмән өлкәләренә эшкә китеүселәр ҙә күп. Халыҡтың күпләп артыуына, асылда, ауыл булышлыҡ итеүен иҫәпкә алғанда, ауылды һаҡлауға, үҫтереүгә мөнәсәбәт тә ҡырҡа үҙгәрергә тейеш, тигәнде аңлата был хәл.***

## Вьетнамдарҙың байыу сере

Туҡһанынсы йылдар башында Өфөлә, ғөмүмән, беҙҙең республикала Вьетнамдан килеүселәр шул тиклем күбәйгәйне. Өфө моторҙар эшләү берекмәһенә генә 30 меңгә яҡын вьетнам кешеһе килгән булған. Беҙ уларҙы 2010 йылда баҙарҙарын ябып, бизнестарын туҡтатып, тыуған илдәренә ҡайтарып ебәрҙек. Ни өсөн

✓ ***Белемле кеше ниндәй генә ситуацияла ла үҙ юлын, үҙ яйын барыбер ҙә таба ала. Белемле кеше ҡалала ғына түгел, ауыл ерендә лә аҡса эшләүҙең юлын эҙләй.***



тигәндә, улар тәғәйенләп ебәрелгән предприятиеларҙа эшләмәйенсә, сауҙаға тотоноп киткәйне. Закон буйынса күптәренең ундай эштәрҙә квотаһыҙ көйө эшләргә хоҡуғы булмай сыҡты. Бында минә прокурор булып эшләгән сағымдағы тәжрибәм ныҡ ярҙам итте. Хәҙер беҙҙә уларҙың бик аҙҙары ғына ҡалды, һаман да законһыҙ рәүештә һатыу менән шөғөлләнеүселәрен тотоп, штраф һалып, тыуған илдәренә оҙатып торабыҙ. Беҙҙең граждандар менән ғаилә ҡороп, гражданлыҡ алып ҡалыусы вьетнамдар бөгөн беҙҙең республикала 800 самаһы. Вьетнам егетенә кейәүгә сыҡҡан бер татар ҡыҙы минә нинә был юлға барыуын: "Улар бит эсмәй, тартмай, көнө-төнө аҡса эшләй", - тип аңлатты.

Дөрөҫөн әйткәндә, мин беҙҙән сит илгә китеп, унда үҙенең эшен асып байып китеүселәрҙе белмәйем. Мәҫәлән, мин беҙҙең университетта герман телдәре факультетын тамамлап, Германияға китеүселәрҙе беләм. Улар унда нисек кенә тырышһа ла, маналыуы хаҡында махсус рәүештә өйрәндем. Улар быға, беҙҙең сауҙагәрҙәрҙән айырмалы рәүештә, баҙарҙа тауар әйләнешен тиҙләтеү иҫәбенә өлгәшкән. Мәҫәлән, баҙарҙа һатыу итеүсе беҙҙең кеше ике суммаҙан әйберҙе ҡайҙандыр барып алып ҡайта ла, өс һумлыҡ әйберен ун һумға һата башлай. Ул был хаҡтан бер тингә лә төшмәй, әйтәйек, ике аҙна эсендә тауарҙарын һатып бөтөрә лә, тағы ла ике сумаҙалын күтәреп, тауар артынан китә. Ә һатыу итеүсе вьетнам кешеһе нимә эшләй? Ул шундай уҡ өс һумлыҡ әйберҙе бер сәғәт эсендә дүрт һумға һатып бөтөрә лә, аҡсаһына тәүгеһенән дә күберәк шул уҡ тауарҙы алып килеп, тағы ла дүрт һумға һата. Ҡыҫҡаһы, ул беҙҙең кеше ун көн тороп эшләгән аҡсаны бер көндә эшләп ала. Ә ун көндән һуң инде вьетнам кешеһенең кеҫәһенә беҙҙекеләрҙекенә ҡарағанда йөҙ тапҡырға күберәк аҡса инеп ята. Беҙҙең байыраҡ сауҙагәрҙәр бер КамАЗ тауар алып ҡайта ла, шуны айҙар буйына баҙарҙа юғары хаҡ Ҡалмыҡстан президенты Кирсан Илюмжинов барлыҡ ҡалмыҡтарҙы шахмат таҡтаһы артына ултыртып ҡуйҙы. Ул көндәрҙә был республиканың хатта көтөүселәре лә шахмат уйнаны. Был да үҙенә күрә белемгә, фекер йөрөтөүгә мейе атакаһы булып тора. Шахматта бер нисә йөрөштә алдан уйлап эш итмәһәң, йәһәт кенә отолаһың. Тормошта ла шулай. Сөнки кеше ниндәй генә эшкә тотонған осраҡта ла, иң тәүҙә уйларға, фекер йөрөтөргә өйрәнә. Кем белә, бәлки, кеше үҙенә лә, бер кемгә лә кәрәкмәгән эште башҡаралыр, йә булмаһа, кәрәк булған осраҡта ла уның эш алымдары бөтөнләй дөрөҫ түгелдер. Күп осраҡта кеше инстинктив рәүештә эш итә, ҡайһы берәүҙең белеме, икенсеһенең мөмкинлеге, өсөнсөһөнөң ваҡыты юҡ. Белемле кеше ниндәй генә ситуацияла ла үҙ юлын, үҙ яйын барыбер ҙә таба ала. Белемле кеше ҡалала ғына түгел, ауыл ерендә лә аҡса эшләүҙең юлын эҙләй. Шул уҡ үрсетелгән малды, үҫтерелгән йәшелсә-емеште нисек итеп һатыу, кешегә файҙаһы юҡ, тигәндә аңлатмай. Мәшһүр Аҡмулланың уҡыу зарурлығы хаҡында әйткән һүҙҙәре һәр ваҡыт актуаль булып ҡала.

### Ҡытай бер тығылһа...

Ишетеүемсә, ҡытайҙарҙың яңы ерҙәрҙе үҙләштереү программаһы бар. Уларҙың төп төбәлгән урыны - Рәсәй. Сөнки беҙҙә ер ҙә, тәбиғи байлыҡтар ҙа күп. Ҡытайҙар ҡайҙа ғына барып урынлашмаһын, шундуҡ бер-береһе менән берегешеп, урамдар, ауылдар, кварталдар төҙөп йәшәй башлай. Шул уҡ ваҡытта уларҙың ошондай йәмәғәтселегә эсендә тик үҙҙәренең генә закондары эшләй башлай. Мәскәүҙә, мәҫәлән, улар бер подъезды тулыһынса һатып алһа, унда артабан бер кем дә аяҡ баҫа алмай. Әгәр ҙә тотош йортто һатып алһалар, бында инде уларҙың бәләкәй генә дәүләте барлыҡҡа килә. Ҡаҙағстанда ҡытайҙарҙан торған тотош бер район бар хатта. Улар совет осоронда ошонда күсеп килеп, тиҫтә йылдар эсендә районды үҙ ҡулына алған. Унда иткәндәр. Бәхетһәң, улар үлгән кешеләрен иҫәптән төшөрмәйҙәр, уның документы менән икенсе бер ҡытай йәшәй башлай икән. Ҡыҫҡаһы, һан буйынса донъяла иң күбе һаналған ҡытайҙарҙың киләсәктә Ер шарының күп урындарына, бигерәк тә Рәсәйгә дәғүә белдерере көн кеүек асыҡ.

### Ауыр саҡта китап уҡыйым

Хәҙерге киң мәғлүмәт замананында һәр кеше бар донъя мөхитен тойоп, уның шатлығын да, ҡайғыһын да уртаҡлашып йәшәй. Был бер яҡтан яҡшы, икенсе яҡтан кешене туктауһыҙ тынғыһыҙ уйҙарға дусар итеүе менән насар ҙа. Шуға күрәлерме, мин бала саҡтан ауыр саҡтарҙа үҙемде китап уҡырға өйрәттем. Әгәр ҙә уҡыған китабым мауыҡтырғыс булһа, ундағы ваҡиғалар эсенә инеп китәм дә, ауыр хәлемдең еңеләйгәнен тоям. Бер аҙ ултырғас, китаптағы ваҡиғалар өсөн борсола башлайым да, үҙемдең ауыр хәлемдең ундағы ваҡиғаға ҡарағанда әллә ни ауыр уҡ булмауын аңлайым.

1986 йылда минә Чернобылдә булырға тура килде. Шунда атом станцияһы шартлауы һөҙөмтәһендә бәләгә тарыусыларға ярҙам итеп йөрөгәндә иҫемде юғалтҡанмын. Мине "Ашығыс ярҙам" машинаһы менән Киевҡа дауаханаға алып киттеләр. Унда байтаҡ ҡына ятҡандан һуң ҡайтарып ебәрҙеләр. Ҡайтҡас, бер йыл самаһы башым ауыртып йөрөнө. Көн һайын иртәнсәк баш ҡыҫып ала ла, көнө буйына ебәрмәй. Үҙ ғүмеремдәге иң ауыр саҡтарым шул булғандыр. Путевка менән санаторийҙарға йөрөнөм, йылап баш ауыртыуы ла бөттө. Барлыҡ саралар менән бер рәттән, минә был һыҙланыуҙы еңеүҙә китап уҡыуым да ярҙам итте. Быйыл минә Чернобылдәге шартлауҙың 27 йыллығы айҡанлы Украинаның "За подвиг во имя людства" тигән миҙалын тапшырҙылар.

# ҠОШТАР ОСОУЫ ЛА...

## тип атала

дып йәшәп китә алманы. Европала, мәҫәлән, ҙур ғына башланғыс капиталың булмаһа, тик үҙ көсөң менән генә аяҡҡа баҫып китеүе бик ауыр, гәмәлдә мөмкин түгел, тиҙәр. Ә бына үҙебеҙҙең Рәсәйҙә, әйтәйек, шул уҡ Себерҙә, әгәр ҙә һәләтең булһа, ныҡ итеп аяҡҡа баҫыуы мөмкиндер.

Ә бына килгән саҡтарында хатта һабындың ни икәнен белмәгән вьетнамдар беҙҙә баҙарҙарҙы үҙ ҡулына алып, тиҙ арала аяҡҡа баҫып киттеләр. Бының бик күп сәбәптәре бар. Беренсенән, уларҙың менталитеты бөтөнләй икенсе төрлө, беҙҙекенә бөтөнләй оҡшамаған. Улар үҙ илдәрендә ҡара тандан ҡараңғы төшкәнсегә тиклем дөгө плантацияларында эшләп, эштән башҡаны күрмәй үҫкән. Йәғни улар тыумыштан тик эшләргә генә өйрәнгән халыҡ. Эшләмәһәләр, улар йәшәй алмай. Беҙҙең халыҡ аҡсаһы булһа ла, булмаһа ла, иркенләп, ирәүәнләнеп йәшәргә күнеккән. Беҙҙекеләр ҡулына аҙ ғына аҡса килеп эләкһә, шул аҡсаны нисек булһа ла тотоноу, ҡуллаһыу юлдарын эҙләй башлай. Кәрәккән-кәрәкмәгән әйберен, сит ил маркалы автомобиль һатып ала, ҡунаҡ саҡыра, ҡыҫҡаһы, эшләп тапҡан аҡсаһының ҙур өлөшөн елгә осора. Ә вьетнам кешеһе иһә, бөгөн тапҡан бер тинен иртәгә ике, иртәнән һуң дүрт тингә әйләндерә.

Баҙарҙа һатыу иткән вьетнамдарҙың ниндәй юл менән шул тиклем байлыҡ туплай ҡуйып һата. Ул һатып бөтөрә, үҙенсә табыш та ала, ә вьетнам кешеһе шул арала, шул уҡ принцип буйынса ҡырҡ КамАЗ тауар һатып өлгөрә. Шул уҡ ваҡытта икеһендә лә бер үк төрлө, бер үк сифатлы тауар һатыуға ҡуйыла. Бөгөн ул тауарҙар Мәскәү янындағы йәшерен фабрикаларҙа, цехтарҙа әҙерләнә.

Бына ошондай юл менән вьетнамдар беҙҙең шарттарҙа



***Ҡыҫҡаһы, ул беҙҙең кеше ун көн тороп эшләгән аҡсаны бер көндә эшләп ала. Ә ун көндән һуң инде вьетнам кешеһенең кеҫәһенә беҙҙекеләрҙекенә ҡарағанда йөҙ тапҡырға күберәк аҡса инеп ята. Беҙҙең байыраҡ сауҙагәрҙәр бер КамАЗ тауар алып ҡайта ла, шуны айҙар буйына баҙарҙа юғары хаҡ ҡуйып һата. Ул һатып бөтөрә, үҙенсә табыш та ала, ә вьетнам кешеһе шул арала, шул уҡ принцип буйынса ҡырҡ КамАЗ тауар һатып өлгөрә. Шул уҡ ваҡытта икеһендә лә бер үк төрлө, бер үк сифатлы тауар һатыуға ҡуйыла. Бөгөн ул тауарҙар Мәскәү янындағы йәшерен фабрикаларҙа, цехтарҙа әҙерләнә. Бына ошондай юл менән вьетнамдар беҙҙең шарттарҙа ҡыҫҡа ғына ваҡыт арауығында ҙур ғына капитал туплауға өлгәште. Беҙҙекеләргә иһә, тиҙ һәм күп кәрәк. Бындай ҡараш, минеңсә, хәҙерге заман баҙарында һис тә отошло түгел.***

ҡыҫҡа ғына ваҡыт арауығында ҙур ғына капитал туплауға өлгәште. Беҙҙекеләргә иһә, тиҙ һәм күп кәрәк. Бындай ҡараш, минеңсә, хәҙерге заман баҙарында һис тә отошло түгел.

### Бәләләребеҙ башы...

Беҙҙең күп кенә бәләләребеҙ уйлай, фекер йөрөтә белмәүебеҙҙән килә. Кешенең тормоштағы күп кенә хаталары ла тәүҙә хәрәкәт итеүҙән, аҙаҡ уйланыуҙан килә. "Ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ", тип юҡҡа ғына әйтмәгәндәр бит. Бер мәл был юл менән нисек аҡса эшләү мәсьәләһен дә белемле кеше үҙенсә, әммә күберәк файҙа, табыш алыу юлы менән хәл итәсәк. Ә белеме булмағаны ни эшләргә белмәйенсә, ары һуғылып, бире һуғылып йөрөй, аҙаҡ инде ситкә сығып китә, үҙ тыуған еренән, ғаиләһенән айырыла, мигрантҡа, гастарбайтерға әүерелә. Шуға күрә, алған юғары белеме буйынса ҡапыл ғына эшләп китеү мөмкинлеге булмаһа ла, был кешегә юғары белем алырға кәрәкмәй, уның элек-электән йәшәгән ҡаҙаҡтар тыуған районын ташлап китергә мәжбүр булған. Ҡаҙағстанда ҡытайҙар мәсьәләһе йылдан-йыл киҫкенләшә бара.

Ишетеүемсә, Силәбе өлкәһендә ун биш меңләп, ә Свердловск өлкәһендә тағы ла күберәк ҡытайҙар йәшәй. Беҙҙә 580 тирәһе ҡытай милләте вәкиле иҫәпләнә. Ҡытайҙар ҡайҙа урын бар, шунда тығыла ла, тиҙ генә үрсеп китә. Францияла бер мәл ҡытайҙарҙың һис тә кәмемәүенә иғтибар

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Миграция хеҙмәтен тормошобоҙҙоң башҡа өлкәләренән һис тә айырып ҡарап булмағанын тойҙоғоҙмо, дуҫтар? Шулай шул, әҙәм балаһын бер дәүләттән сиген үтеп, икенсеһенә мохтажлыҡ, йәшәү талабы йөрөтә. Хәйер, ҡоштар ҙа бит бер урында йәмле йәйҙәр үткәргәндән һуң, көҙгө ҡырауҙар өткәс, ул урынды ҡалдырып, йәйҙәр эҙләп икенсе тарафтарға юллана. Был да миграция тип атала...**


**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ яҙып алды.**

ЙӘН АУАЗЫ

**"Байыҡ" республика телевизион бейеү конкурсын телевидениеға төшөрөү мәлендә Учалы районынан килгән "Ләйсән" бейеү ансамбле ағзалары менән танышҡайныҡ. Ансамблдә ир уртаһына еткән, сәстәренә сал ҡуна башлаған, элекке ауыл хужалығы хеҙмәтсәндәре, бөгөнгө хаҡлы ялдағы дәртле-дәртле ағайҙар ҙа, йәштәр ҙә бар ине. Һәүәҫкәр бейеүсе, Науруз ауыл биләмәһе хакимиәте башлығы Закир Ғариповты райондаштары "Зирәк аҡыллы", "Әйтһә, дөрөҫ, әммә ултыртҡансы әйтә торған кеше" тип таныштырҙы. Был һүҙҙәрҙең дөрөҫлөгөнә иһә уның менән әңгәмәләшкән ваҡытта инандыҡ. Әйҙәгеҙ, уның үҙенә һүҙ бирәйек.**

# ҠАЙҘА БАТЫРҘАРЫБЫҘ,

## тарихта ҡалдылармы?



### Ауыл бөтмәһен инде ул...

Алға киткән капиталистик дәүләттәрҙә халыҡтың бик аҙ өлөшө - 5 процент самаһы ғына ауылда йәшәй. Ә беҙҙең республикала иһә, яңылышмаһам, халыҡтың 45 проценттан ашыуы ауыл ерендә көн күрә. Дәүләт ни тиклем үҫһә, ауылдар шул тиҙлектә бөтөүгә табан бара. Бик ҡатмарлы мәсьәлә был. Бынан бер ҡайҙа ла китеп булмай. Мине иң тәүҙә башҡорт ауылдарының ҡартайыуы борсой. Ауылдар ҡартая икән, киләсәктә улар юҡҡа сығасаҡ, тигән һүҙ. Оптималләштереү, тигән бик шыма, сикәнес бер һүҙ килеп сыҡты. Башҡортсаға әйләндерһәң, "мәктәптәрҙе ҡоротоу" була инде. Мәктәптәр ҡороғас, ауылдар ҙа ҡорой, тигән һүҙ инде был. Бөгөн врач кадрҙарын, миллион һум түләп, райондарға ҡайтара торған программа бар. Йәштәрҙе ауылдарға ҡайтарыу юлдарын хәстәрләгән шундайыраҡ дәүләт программаһы кәрәк ине. Сөнки ауылда етештерелгән продукция илгә һәр ваҡыт кәрәк. Шуның өсөн генә булһа ла ауылдар йәшәргә тейеш. Әгәр беҙ ауыл хужалығы продукцияһын сит илдән һатып алабыҙ икән, беҙҙең киләсәгебеҙ юҡ, тигән һүҙ.

Мин Науруз ауылында тыуғанмын, әммә минең биш ауылым бар. Бишеһе лә биш бармағым һымаҡ ҡәҙерле. Мин етәкләгән биләмәлә бер ниндәй етештереү төрө лә юҡ. Фермалар бөтөрөлгән, совхоздың бер бүлексәһе - "Байрамғол" агрофирмаһы ғына ҡалған. Фермалар бөтөүҙең бер файҙаһы ла булды ул. Эскелек кәмене. Фермала эшләүсенең хеҙмәте бер ваҡытта ла дөрөҫ баһаланманы, эш хаҡы бәләкәй генә ине. Шуға күрә, һауынсы ярты литрлыҡ һауыт менән булһа ла - һөтөн, мал ҡараусы емен алып ҡайта, үҙенең малын аҫрарға тырыша ине. Фермалар бөтөрөлгәс, көтөүлек ерҙәре күбәйҙе. Әле беҙҙең ауылда тырышып донъя көткән, ҙур хужалыҡ алып барған ғаиләләр бик күп. Кешеләр хәҙер унар баш эре мал аҫрай. Мал көтөр өсөн техника һатып ала. 544 кеше йәшәгән бәләкәй генә ауылда 40-ҡа яҡын берәмек ауыл хужалығы техникаһы бар. Техникалы кеше үҙенә лә, күршетирәһенә лә файҙа килтерә һәм тейешенсә баһаһын да ала. Ошолай барһа, йәғни бар ғаиләләрҙе лә әлеге әүҙем ғаиләләр өлгөһөнә эйәрткәндә, ауылдар йәшәр әле, тип өмөт ителәә.

### Телебеҙҙе тәүҙә үҙебеҙ ҡәҙерләйек

Мине тағы шул көйөндөрә: ауыл биләмәләре хакимиәттәре башлыҡтары аҙнаһына йәки ике аҙнаға бер тапҡыр район үҙәгенә оператив кәңәшмәгә йыйылабыҙ. Йыйылышта ҡатнашыусыларҙың 5-7 проценты ғына урыҫ милләте вәкилдәре була. Әгәр ҙә мин башҡортса һорау бирәм йәки сығыш яһайым икән, кәңәшмәгә килгән күп кенә милләттәштәрем миңә, ниңәлер, юғарынан ҡарай башлай. Ә мин һәр ваҡыт тик башҡортса һөйләшергә тырышам. Сөнки башҡорт теле - дәүләт теле. Был ғәҙәтем милләтселектән дә түгел. Әгәр икенсе милләт кешеләре үҙҙәрен зыялы тип һанай икән, шул ерлектә йәшәгән аҫаба халыҡтың телен иң беренселәрҙән булып өйрәнергә тейеш. Бына зыялылыҡ ҡайҙан килә. Ә беҙ үҙебеҙҙе зыялы итеп күрһәтер өсөн тик русса ғына һөйләшәбеҙ. Быны зыялылыҡ билдәһе итеп түгел, ә милләтебеҙгә хыянат итеү билдәһе тип атар инем.

Хәрби хеҙмәт ваҡытында сит милләт кешеләренең минең телемә ҡарата ҡыҙыҡһыныуын күп күрергә тура килде. Хәрби Һауа Көстәрендә авиация двигателдәре механигы булып сержант дәрәжәһендә хеҙмәт итеп йөрөйөм. 1977 йыл, Латвия. Рәсәй был республика халҡы тарафынан ул ваҡытта ла оккупант итеп ҡабул ителде. Ни өсөн икәнлеген тарихтан беләбеҙ. Башлаған темаға кире ҡайтайыҡ. Ситкә сығырға тура килһә, һалдатты һәр саҡ магазин-кибеттәр ылыҡтыра. Урыҫ егеттәре һатыусыларға русса өндәшһә, бөтәһе лә ләм-мим - аңламағанға һалыша. Мине, үҙебеҙҙең сержанттар, ихтирам итеп, "Черный" тип кенә алып йөрөтә инеләр. Магазинда һатыусылар менән уртаҡ тел таба алмағас, миңә инәлә башлайҙар. "Икмәк кенә алып кил инде, Черный", тиһәләр, мин китәм. Барам да, һатыусыға матур итеп йылмайып, үҙемдең яҡшы уйниәт менән килеүемде белдереп, итәғәтле итеп башҡортса өндәшәм. "Һаумыһығыҙ, миңә бер-ике икмәк кәрәк ине", тим. Латыштар бик юғары мәҙәниәтле халыҡ, хөрмәт менән килгәнде тиҙ аңлай. Һатыусылар минең телемде аңламауы тураһында әйтә, телем менән ҡыҙыҡһына, артабан кем булыуым, ҡайҙан килеүем тураһында һораштыра башлай торғайны. Шундай һығымта яһағы килә: милләттәр араһындағы дуҫлыҡты боҙмаҫҡа, шул уҡ ваҡытта үҙебеҙҙең юлдан барырға, үҙ милләтебеҙгә, үҙ телебеҙгә хөрмәт уята, үҙ хоҡуҡтарыбыҙҙы иҫбат итә белергә кәрәк.

### Зыялы - ул үҙен ҡорбан итеүсе булыр

Күпме ғүмер кисерәм, әммә үҙем тураһында "Мин илемде, халҡымды ҡайғыртҡан кешемен", тип әйтергә батырсылыҡ итә алмайым. Өҫтәүенә, ауылымды, үҙемдең төйәгемдә йәшәгән халҡымды ҡайғыртҡан кеше булараҡ, ни генә әйтһәм дә, "Минең һүҙем һүҙ булырмы?" тигән шик тыуа. Ҡасандыр беҙҙең ауылдан данлыҡлы Ҡарас сәсән үҫеп сыҡҡан. Уның һүҙенә ҡолаҡ һалып, урындағы халыҡ Ҡараһаҡал яуына ҡушылмаған һәм үҙен һаҡлап ҡала алған. Ҡаһым түрәне алайыҡ. Ул да башҡорто өсөн янып йәшәгән кешеләрҙең береһе булған, ул да, Кинйә батыр ҙа әле булһа тейешенсә баһаланмаған. Ә бит халҡы өсөн үҙен ҡорбан иткән шәхестәр бит улар. Ләкин ундай шәхестәр тарихта ғына тороп ҡалғанмы, уларҙың батырлыҡ өлгөһөн дауам итерҙәй бөгөнгө көн геройҙары ҡайҙа? Ошо һорауға яуап тапҡы килә...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Теге йәки был мәсьәләне ҡырҡа хәл итер алдынан ныҡлап уйларға, ситтә йөрөгәндә лә, ниндәйҙер сетерекле хәл ваҡытында ла кешелек сифаттарын юғалтмаҫҡа, һүҙ әйтер алдынан был һүҙеңдең халҡың тарафынан ҡабул ителеүе-ителмәүе тураһында уйланырға, башҡа мәсьәләрҙә лә "Иҙел күрмәй, итек сисмәҫкә" саҡыра бөгөнгө ҡунағыбыҙ. Һәр хәлдә, күптәребеҙ өсөн өлгө булырҙай аҡыл менән уртаҡлашты әлеге ҡунағыбыҙ. Аҡыл уртаҡлашыр кешеләр эҙләйбеҙ, уларҙан ошондай бәләкәй генә булһа ла сығыштар көтәбеҙ. Яҙып ебәрегеҙ.**

**Илгизәр БУЛАТОВ яҙып алды.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ТЕЛЕБЕҘ БАР...

## һөйләй белмәйбеҙ

**Рәсимә УРАҠСИНА, филология фәндәре кандидаты:** Һүҙ ҡеүәһе, нәфис һүҙ көсө тураһында фекерләшергә саҡырам. Ғөмүмән, беҙ матур, асыҡ итеп һөйләй белмәйбеҙ. Телмәребеҙҙә башҡорт тел байлығын, мәҡәл-әйтемдәрҙе ҡулланмайбыҙ. Бөгөн күп йәштәребеҙ, мәҫәлән, студенттар, өндәрҙе лә дөрөҫ әйтә алмай. Йәштәребеҙҙең этеп-төртөп аралашыуын тыңлайһың да, йәнле һөйләү телебеҙҙең хәле мөшкөл булыуына инанаһың.

Миңә биш йыл Мәскәүҙә эшләргә тура килде, ошо биш йыл эсендә бик бай мәғлүмәт, белем алып ҡайттым, тип әйтә алам. Баш ҡалала эшләүсе тел белгестәре менән аралашыуым, улар менән бер мөхиттә эшләү, уларҙың онотолоп барған тел байлыҡтарын ҡайтарыу буйынса эш тәжрибәһе менән танышыуым, Щепкин исемендәге юғары театраль училищела (институтта) башҡорт теле буйынса үҙебеҙҙең студенттарға белем биреүем Башҡортостанда быға са бер тапҡыр ҙа баҫылмаған "Слово. Театр. Жизнь. Культура башкирской речи" тип исемләнгән дәреслек баҫтырып сығарыуға булышлыҡ итте. Бөгөн ул уҡытыусыларҙың өҫтәл китабына әйләнде.

Тағы ла, әҙәбиәт менән театр сәнғәтен берләштергән матур бер күренеште миҫал итеп килтерге килә. Театр әһелдәре тарафынан ойошторолоп, үҙенә бихисап тыңлаусы йыйған әҙәби кисәләр үтә Мәскәү сәхнәләрендә. Мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренең үҙәк йортонда, миҫалға, йыш ҡына Василий Лановой, Алла Демидова ише күренекле Мәскәү артистары, Рәсәйҙең башҡа ҡалалары театрҙарының йәш актерҙары ҡатнашлығында әҙәби кисәләр үтә. Бындай кисәләргә ҡанатлы һүҙ, проза тыңларға теләгән һәр кем йөрөй ала. Һөҙөмтәлә, килеүселәрҙең рус теле буйынса белеме арта, ә сәхнәнән башҡарыусылар өсөн ул бынамын тигән практика булып тора. Ошондай эште Башҡортостанда ла башлап булмаҫмы икән ни берәй ваҡыт, тип хыяллана инем. Шулай ҙа үҙем уҡытҡан студенттар менән был юҫыҡта күп кенә шөғөлләндек. Башҡорт теле дәрестәрем Башҡортостан телевидениеһының алтын фондында һаҡланған актерҙар башҡарыуындағы сығыштарҙы ҡарап, уларҙы анализлап үтә ине. Был йәһәттән башҡорт халҡының матур һөйләү оҫталығын үҙенә һеңдергән Арыҫлан Мөбәрәков, Рәғиҙә Янбулатоваларҙы, уларҙан ҡала, урта быуын актерҙарынан Әхтәм Абушахманов, Хөрмәтулла Үтәшевтарҙы өлгө итеп ҡуя инем. Мөбәрәковтың оҫталыҡ мәктәбе бар ине, ул мәктәп үҙе менән бергә китте, бөгөнгө олпат актерҙар - һүҙ оҫталары туплаған белемде лә йәштәргә өйрәтеп өлгөрөргә, уларҙың да мәктәбенең тамыр йәйеүенә булышлыҡ итергә кәрәк ине. Әле Хөрмәтулла Үтәшев та ошо көндәрҙә М. Ғафури исемендәге башҡорт дәүләт академия драма театры артистары менән әҙәби кисә уҙғарҙы, был эште, һис шикһеҙ, дауам итергә кәрәк. Ни өсөндөр беҙ, мәскәүлеләргә ҡарап, фәһем, идея алырға ашҡынып бармайбыҙ, ә улар эҙләнә, күп һорауҙарға яуап таба. Һис юғы, ниҙер эшләй. Башҡорт донъяһының һүҙ сәнғәте мәктәбен үҫтереү тураһында хыялланам.

*ИНТЕРНЕТТАН*



# ҺИМЕРМӘҺЕН, ТИҺӘҢ...
## ҡыҙ балаң

■ Һуңғы ун йыл эсендә үткәрелгән тиҫтәләрсә тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, майһыҙ диеталар сәләмәтлек өсөн зыян ғына килтерә. Бөгөн түбән калориялы аҙыҡ-түлек ҡулланыу модаға инеп китте һәм ул иң сәләмәт туҡланыу өлгөһө итеп ҡабул ителә. Бындай продукттар етештереүселәр вәғәҙәләүенсә, май күләме түбән булған аҙыҡ йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренән, яман шеш һәм диабеттан һаҡлай. Әммә был аҙыҡ төрҙәре составындағы тоҙ, трансжир, зарарлы углеводтар бирәүгә лә файҙа килтергәне юҡ әле. Сәләмәтлек өсөн майҙың күләменә ҡарағанда, уның сифаты күпкә мөһимерәк. Мәсәлән, түбән калориялы икмәктә май күләме аҙ, тик аҡ он һәм шәкәр күп, шуға ла майһыҙ, әммә эшкәртелгән углеводтарҙан торған диета ауырлыҡтың артыуына, йөрәк сирҙәренә, 2-се типтағы диабетка килтерә.

■ Британияның Бристоль университеты ғалимдары әйтеүенсә, баланың аҡыл үсеше уның бәләкәй сағында нисек туҡланыуына бәйле. Өс йәшкә тиклем "зарарлы" аҙыҡ-түлек ашаған балаларҙы биш йылдан һуң тикшереп ҡарағандар һәм интеллект коэффициентының тиҫтерҙәренекенә ҡарағанда түбәнерәк булыуын асыҡлағандар. Ғалимдар әйтеүенсә, өс йәшкә тиклем балаға "дөрөҫ" аҙыҡ биреү мөһим, сөнки мейе йәшәүҙең тәүге өс йылында әүҙем үҫешә.

■ Әфлисунда, грейпфрутта һәм башҡа цитрус емештәре составындағы берләшмәләр ҡатын-ҡыҙҙар араһында инсульт ҡурҡынысын кәметә икән. Норвичтағы Англия Көнсығыш университеты ғалимдары көндәлек рационы юғары күләмдәге флавоноидтарҙан торған ҡатын-ҡыҙҙар араһында ишемик инсульт менән ауырыу хәүефе 19 процентҡа кәмеүен асыҡлаған. Флавоноидтар - флавоноидтарҙың бер төрө, улар башлыса үҫемлектең пигментацияһы өсөн яуап бирә. Флавоноидтарҙың сығанағы булып цитруслылар, еләк-емеш, йәшел сәй, ҡыҙыл шарап, ҡара шоколад иҫәпләнә.

■ Ашҡаҙан сире менән яфаланыусыларға табиптар абрикос ашарға кәңәш итә. Абрикос емеше аппетит булмағанда, ашҡаҙан һуты насар бүленгәндә файҙалы. Уның составында калий күп, шуға ла ул йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарынан, гипертониянан килешә. Абрикос организмдан азотлы шлактарҙы сығарыуға булышлыҡ итә, гемоглобинды күтәрә, арыуҙы бөтөрә. Абрикос шулай уҡ метаболизм боҙолғанда тәҡдим ителә.

■ Аҙыҡ-түлек ҡабындағы матдәләр ҡыҙ балаларҙың һимеҙлегенә килтерә, ти табиптар. Был химикаттар организмдың матдәләр алмашыныуына тәьҫир итә һәм балаларҙың ябығыуын ҡатмарлаштыра, тип яҙа USA Today. Балаларҙың һимеҙлегенен төп сәбәбе булып дөрөҫ туҡланмау һәм физик әүҙемлек булмауы тора. Хәҙер яңы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, аҙыҡ-түлек ҡаптарындағы ДФП тип аталған химик матдә лә артыҡ һимеҙлеккә килтереүе ихтимал, ти мәҡәләнең авторы Фатима Васим. ДФП йәки бисфенол А барлыҡ ҡаптарҙы ла, пластик, металл шешәләрҙе лә етештереүҙә ҡулланыла. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, туғыҙ йәштән ун ике йәшкә тиклемге ҡыҙҙарҙың организмында ДФП кимәле күп булған һайын, уларҙа һимеҙек хәүефе лә арта. Йәғни, тап ошо осорҙа улар был матдәгә тиҙерәк бирешеп бара.

*ТӘБИҒӘТ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ*

# КӘКҮК



**Быйыл май башынан бирле кәкүк ҡысҡырып аптыранды. Аптыранды, тигәне шунан ғибәрәт инде. Элек тәүге кәкүк тауышынан уҡ яҙғы көндәр йылынып китә торғайны. Быйыл иһә май аҙағына хәтлем көндәр һыуыҡ торҙо ла ҡуйҙы. Ә шулай ҙа кәкүк үҙ теләгенә өлгәште, буғай. Ниһайәт, ай аҙағында көндәр йылыныу ғына түгел, хатта үтә эҫеп китте. Кәкүк әллә үтә нык тырышып, шаштырып ебәрҙеме икән, тип уйлап ҡуям ҡайны саҡ.**

Ә шулай ҙа кәкүк һүҙе беҙҙә ниндәйҙер сәйер тойғолар уята. Шомло ҡош булып иҫәпләнә ул. Алыҫтан уның тауышын ишетеп һөҡланып тыңлап торабыҙ. Ә бына уны яҡындан күреү, уның ауылға осоп килеп инеүе бәлә килеүе тураһында иҫкәртә кеүек. Шуға күрә, ошо ҡошто борон-борондан ата-бабаларыбыҙ ризалатырға тырышҡан. Яҙ көнө уға арнап, махсус йола - "Кәкүк сәйе" байрамы башҡарылған. Кәкүктең ризалығын алыу өсөн уға инселәп кенә урманға төрлө һөт аҙыҡтары ҡалдырыр булғандар. Был йоланы ауылдың оло инәйҙәре ҡыҙ-ҡырҡын менән бергә башҡарған. Оло быуын кешеләре йәштәргә был йола тураһында һөйләгән, урман йәнлектәре тураһында йомаҡтар әйткән, ҡоштар тураһында уйындар уйнатҡан. Байрамдың төп уйыны булған "Күк тирәк" уйыны уйнатылған. Был матур йола табын сәйе - "Кәкүк сәйе" менән тамамланып ҡуйған.

Был йола тураһында Таңһылыу Ҡарамышева үҙ әҫәрендә ошолай яҙа:

"Таң атып, ҡояш тау башына еткәс, Таңдысаны әсәһе арҡаһынан һөйөп уятты.

- Тор, ҡолонсағым. Барса донъя йөҡонан уянып бөттө инде. Ана, кәкүк тә саҡыра...

- Кемде саҡыра? Ҡайҙа саҡыра?

- Таңдысаны "кәкүк сәйе" эсергә алып килегеҙ, ти.

- Бәй, кәкүк тә сәй ҡайната беләме ни? Ә уның самауыры бармы?

Таңдыса, әсәһенә һорауҙар яуҙыра-яуҙыра, тиҙ генә кейенде лә:

- Әсәй, сәйҙе кәкүк ҡайҙа эсерә?-- тип һораны.

- Тауҙа, ҡыҙым. Йәшел үләндәр түшәлгән, ебәк шәлле ҡайындарҙың һәр ботағы һайын ҡоштар һайрап ултырған сәхрәлә.

- Әсәй, кәкүк сәй эсергә беҙҙе генә саҡырамы?

- Юҡ, ҡыҙым. Кәкүк шулай һәр йыл һайын йәй башында, ер-һыу һурыҡҡас, ауылыбыҙҙың бөтә инәйҙәрен, апайҙарын, барса ҡыҙ-ҡырҡынын тәбиғәттең иң гүзәл бер урынына сәй эсергә йыйып ала.

- Ә малайҙарҙы, атайҙарҙы, олатайҙарҙы?

- Уларҙы саҡырмай шул. Кәкүк бына һинең кеүек матурҡай ҡыҙҙарҙы ярата..."

Бына бит, ниндәй матур йола бар халҡыбыҙҙа. Әммә бөгөн ул бер аҙ онотолоп барған кеүек.

Әйтергә лә түгел, кәкүктең яғымлы тауышы бигерәк күңелгә ятышлы шул. Уны барыбыҙ ҙа тыңларға ярата. Халыҡта шундай һынамыш бар. Кәкүк күпме тапҡыр ҡысҡыра, тыңлап торған кешенең шунса йыл ғүмере бар әле. Был турала Рәми Ғарипов ошолай яҙа:

*Кәкүк, кәкүк, әйтсе миңә,*
*Күпме минең ғүмерем?*
*Күпме минең был донъяла*
*Шатлыҡтарым, күререм?*
*Кәкүк, кәкүк, ниңә улай*
*Һүҙең һаран - бер, ике, өс?*
*Оҙағыраҡ ҡысҡырырға*
*Тапмайһыңмы берәй көс?*
*Кәкүк, кәкүк,*
*Үпкәләмәм, аҙ бирһәң дә ғүмерҙе -*
*Бар ҡайғыһын, бар шатлығын*
*Татып китәм был ерҙең.*

Ә инде кәкүкте беҙ шуға өнәп етмәйбеҙ - ул үҙ балаларын тәрбиәләп үҫтермәй. Был турала "Урал батыр" эпосында ла иҫкә алына.

... Урал, йыйылған йәнлеккә, ҡошҡортҡа ҡарап, былай тигән, ти:

*"Үлем тигән ауыҙдың*
*Төрөн һанап бөләйек,*
*Көслө көсһеҙҙе ейгән*
*Йоланы беҙ өҙәйек.*
*Йыртҡыслыҡты бөтөрәйек,*
*Яңғыҙ ҡалған Үлемде*
*Бергә эҙләп үлтерәйек!" -*

тип өндәшкәс, һәр кем үҙ фекерҙәрен еткергән. Ә бына кәкүк ошолай тип яуаплаған:

*Кәкүк тағы: "Оям юҡ,*
*Балам тигән ҡайғым юҡ:*
*Бала - бауырым, тигәндәр,*
*Бала өсөн көйгәндәр*
*Ни теләһә - миңә шул", -*
*Тип, уртаға һалған, ти.*

Ә нишләп кәкүктең "үҙ ояһы, балам, тигән ҡайғыһы" юҡ икән - быны төрләсә аңлаталар. Уртаҡ фекер юҡ, буғай. Ә бына ошо аңлатма бик үҙенсәлекле. Йәнәһе, ҡасандыр кәкүккә ниндәйҙер ҡоштар ҙур зыян килтерә башлаған. Улар кәкүк йомортҡаһын һытып эсә лә китә икән. Тора-бара кәкүктәр һаны кәмей башлаған. Ни эшләргә - был уй тынғы бирмәгән кәкүккә. Ахыры, ул үҙ тоҡомон һаҡлап алып ҡалыу өсөн насар юлға баҫырға мәжбүр булған. Ул үҙ йомортҡаһын ҡарға ояһына һалып ҡарарға баҙнат иткән. Бындай "этлек" тураһында башына ла килтермәгән ҡарға сит йомортҡаны ихлас баҫҡан. Әммә мәле еткәс, ошо йомортҡанан сыҡҡан ят себешкә ҡарап, "башын тырнап" уйға ҡалған. Шулай ҙа ҡарға уны тәрбиәләп үҫтергән. Әммә шикле уй бер ҙә тынғы бирмәгән. Тора-бара ул эштең низә икәнен һиҙеп ҡалған һәм "бот сабып" аптыраған. Ярһыуынан ни эшләргә белмәгән ҡарға сит йомортҡаны оянан шунда уҡ алып ташлаған.

02.20 "Страх высоты". Комедия (16+)
04.10 "Мстители". Комедия (16+)

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести - Башкортостан"
09.00 "Ауаз"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Вести - Башкортостан"
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть"
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Дело Х. Следствие продолжается". Ток-шоу (12+)
14.00 "Вести"
14.30 "Вести - Башкортостан"
15.00 "Тайны института благородных девиц", 113-я серия
16.00 "Поцелуйте невесту!". Сериал
17.00 "Вести"
17.10 "Вести - ПФО"
17.30 "Каменская-4". Сериал (12+)
18.30 "Прямой эфир" (12+)
19.40 "Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Юрмала". Фестиваль юмористических программ (12+)
22.45 "Карусель". Мелодрама (12+)
00.55 "Лабиринт Фавна". Фэнтези (16+)
03.25 "Горячая десятка" (12+)

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45"Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.15 "Моңло аҙан". Дини йырҙар (6+)
09.35 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (0+)
10.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
11.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
11.30 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.45 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Мөғжизәгә килә ышанғым". Вәхит Хызыров (6+)
17.00 "Һуңғы Ғәйнә". Спектакль (6+)
20.00 "Кис ултырып". "Юлдаш йыры". Концерт (6+)

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+)**
**10.00, 16.45 "Круизы в мир открытий" (16+)**
**10.30 "Город АЮЯ"**
**10.45 "Ғәләмәт донъя"**
**11.00, 17.30 "Замандаштар" (6+)**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30 "ФК "Уфа": даешь Премьер-лигу!"**
**12.00, 03.00 "Юмабай Исянбаев" (12+)**
**12.30, 16.15 "Учим башкирский язык"**
**12.30 "Уңған килен" (16+)**
**13.30, 19.30, 00.30 Новости**
**13.45 "Мелодии души" (+12)**
**14.30, 06.00 "Урал батыр-2012" (+6)**
**15.15 "Зеркальце"**
**15.30 "Каникулы НЕстрогого режима"**
**15.45 "Байтус" (6+)**
**16.00 "Сулпылар"**
**16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+)**
**18.00 "Йома"**
**18.30, 20.30, 01.00, 02.00 "Телецентр"**
**20.00 "Сәңгелдәк"**
**20.15 "Полезные новости"**
**21.15 "Дневник фестиваля "Оперение"**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+)**
**22.30 "Отдел культуры" (12+)**
**23.00 "Последнее звено" (16+)**
**03.30 "Художественный фильм" (16+)**
**06.45 "Весело живем"**

## 29 ИЮНЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Испытание верности"
08.45 "Смешарики. Новые приключения"
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.45 "Слово пастыря"
10.00, 15.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Смак" (12+)
10.55 "Алсу. "Я - не принцесса"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Идеальный ремонт"
13.10 "Абракадабра" (16+)
15.30 "Форт Боярд" (16+)
16.55 "Звездная родня"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.15 "Угадай мелодию" (12+)
18.55 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым"
19.55 "Невероятный Гудвин". Док. фильм (16+)
21.00 "Время"
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым" (16+)
23.00 "Элементарно". Сериал (16+)
23.50 "Дети Третьего Рейха" (16+)
00.50 "Дневник 35-го Московского международного кинофестиваля"
01.00 "Тонкая красная линия". Военная драма (16+)
04.05 "Где моя тачка, чувак? (16+)

### РОССИЯ 1

04.50 "Соломенная шляпка"
07.30 "Сельское утро"
08.00 "Вести"
08.10 "Вести - Башкортостан" (16+)
08.20 "Минутное дело"
09.25 "Субботник"
10.05 "Качество жизни"
11.00 "Вести"
11.10 "Вести - Башкортостан"
11.20 "Вести. Дежурная часть"
11.55 "Честный детектив" (16+)
12.25, 14.30 "Найденыш-2". Мелодраматический сериал (12+)
14.00 "Вести"
14.20 "Вести - Башкортостан"
16.35 "Субботний вечер"
18.30, 20.45 "Мой любимый гений". Мелодраматический сериал (12+)
23.05 "Все не случайно". Мелодрама
00.45 "Метка". Триллер (16+)
02.55 "Мои счастливые звезды" (16+)
04.50 "Комната смеха"

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
08.20 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.35 "Тәмле" (12+)
09.15 "Кош юлы". Рамазан Йәнбәков
10.15 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
10.25 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн". Лилиә Биктимерова йырлай (6+)
11.00 "Онотолор тимә... ". Ретро (0+)
11.25 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.45 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 Әлфиә Юлсурина. Концерт (6+)
19.00 "Етегән". Хит-парад (6+)
21.00 "Сүллектең аҡ ҡояшы". Фильм (6+)

### БСТ

**07.00, 19.30 Новости (на башк. яз.)**
**07.15, 03.15 Спектакль "Роковая тайна"**
**09.00 "Көндәлек" (6+)**
**09.30 Мультфильм (на башк. яз.)**
**10.00 "Сәләм+" (12+)**
**10.15 "Бәхетнамә"**
**10.45 "Вопрос+Ответ=Портрет"**
**11.30 "Аль-Фатиха"**
**12.00 "Следопыт"**
**12.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.45 "Здоровое решение" (12+)**
**13.15 "Смелая музыка" (16+)**
**14.15 "Дарю песню". Концерт**
**16.15 "Первый фестиваль юниор-лиги КВН РБ "Кубок надежды-2013"**
**18.30 "Хазина"**
**19.00 "Башкорттар"**
**20.00 "Сәңгелдәк"**
**20.15 "Еду я деревню"**
**20.45 "Живое село" (12+)**
**21.15 "Преград.net" (12+)**
**22.00 "Растет мой курай на Урале"**
**22.30 "Форест Гамп" (16+)**
**00.45 Художественный фильм (16+)**
**05.30 "Последнее звено" (16+)**
**05.00 "Растет мой курай на Урале"**

## 30 ИЮНЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.40, 06.10 "Молодая жена" (12+)
06.00 Новости
07.40 "Армейский магазин" (16+)
08.15 "Дисней-клуб"
08.45 "Смешарики. ПИН-код"
08.55 "Здоровье" (16+)
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Непутевые заметки"
10.35 "Пока все дома"
11.25 "Фазенда"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Ералаш"
13.30 "Жизнь и приключения Мишки Япончика", 4-6 серии (16+)
16.40 "Клуб Веселых и Находчивых" (12+)
18.55 "Вышка" (16+)
21.00 "Воскресное "Время"
22.00 "Универсальный артист"
23.45 "Церемония закрытия 35-го Московского международного кинофестиваля"
00.40 "Балкон с видом на море". Триллер (16+)
02.40 "Школа выживания выпускников" (16+)
04.20 "Контрольная закупка"

### РОССИЯ 1

05.40 "31 июня". Мелодрама
08.20 "Сам себе режиссер"
09.10 "Смехопанорама" Евгения Петросяна"
09.40 "Утренняя почта"
10.20, 14.20 "Вести - Башкортостан. События недели"
11.00 "Вести"
11.10 "Любовь до востребования". Мелодрама (12+)
13.15, 14.30 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа
14.00 "Вести"
14.20 "Вести - Башкортостана"
15.55 "Сваты-5". Комедийный сериал (12+)
20.00 "Вести недели"
21.30 "Обратный билет" . Мелодрама (12+)
23.25 "Сильная слабая женщина". Мелодрама (12+)
01.20 "Американка". Мелодрама (12+)

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.15 "Балҡыш". Нурия Ирсаева (12+)
09.45 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
10.50 "Йырлап асыла күңел" (0+)
11.30 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.45 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Айһылыуҙың айлы кистәре". Спектакль (6+)
19.00 "Йондоҙло сәғәт". "Дарман" проекты (0+)
20.00 "Халыҡ мәктәбе". Хәйбулла районы Әбеш мәктәбе юбилейы
20.30 "Яҙмыштан бәхеттәр көтәм". Хәлимә Ғәббәсова (+6)

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.30 "Йома"**
**09.00 "Еду я в деревню"**
**09.30 "Живое село"**
**10.00 "Бауырһаҡ"**
**10.15 "Городок АЮЯ"**
**10.30 "Семәр" (6+)**
**10.45 "Сулпылар"**
**11.00 "Ансамбль "Веселинка"**
**11.45 "Алтын тирмә"**
**12.30 "Үткән ғүмер"**
**13.00 "Тәмле" (12+)**
**13.30 "Башкорттар"**
**14.00 "Дарю песню"**
**15.00 "Весело живем" (12+)**
**15.15, 19.00, 05.45 "Специальный репортаж"**
**16.00 "Дорога к храму"**
**16.30, 18.45 "Замандаштар" (6+)**
**16.45 "Вестник Газпромтрансгаз Уфа"**
**17.00 "Историческая среда" (12+)**
**17.30 "Местная история"**
**17.45 "Праздник села"**
**18.00 "Дарман"**
**19.15 "Тюрксой - 20 лет" (12+)**
**19.30 Новости недели (на башк. яз.)**
**20.00 "Любимое дело"**
**20.15 "История признания" (12+)**
**20.30 "Итоги спорта" (16+)**
**21.00 "Урал Лото 6 из 40" (16+)**
**21.15 "Фестиваля "Оперение"**
**21.30 Новости недели (на русск. яз.)**
**22.00 "Байыҡ-2013"**
**23.00 "Вечер.com" (12+)**
**23.45 "Свидание с джазом" (12+)**
**00.45 Художественный фильм (16+)**
**03.30 "Форест гамп" (16+)**

### *ИҒЛАН*

Студенческий билет, выданный ГБОУ ВПО БГМУ на имя **Субхангуловой Язгуль Рахимовны**, считать недействительным в связи с утерей.

✓ *Ниңә кисәге ҡайғыларға һәм хаталарға йәбешеп ятырға? Әйҙәгеҙ, алға киттек!*

*(Будда).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ДОНЪЯЛА ҺИН ЯҢҒЫҘ БЫЛБЫЛ ТҮГЕЛ




**Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.**

**24-се һандағы сканворд яуаптары: Горизонталь буйынса:** Ашамһаҡ. Милитаризм. Веер. Лимонка. Разряд. Каширина. Тана. Шафиҡова. Моратова. Латыпова. Йосопов. Антракт. Маяҡ. Табанса. Әзмәүер. Ваз. Ҡата. Брандспойт. Ишмуллин. Оҫта. Икар. Тамға. Пьеса. Шына. Лайка. Рәшә. Ҡаҙаҡбаев. Юҡлыҡ. Нужа. **Вертикаль буйынса:** Ишәй. Сәфәрғолова. Семтем. Тап. Амиго. Әлифба. Олҡа. Марля. Провинциал. Идеал. Ашҡаяҡ. Аристократ. Париж. Аласыҡ. Китап. Мордва. Театр. Баян. Кама. Иптәш. Мурҙа. Аптыраҡ. Вена. Аҙым. Балет. Ротор. Ауылдаш. Аҙнаев. Амати. Апарт. Ауаз. Нота.

## *КОТЛАЙБЫҘ!*

Ошо көндәрҙә 60 йәшлек юбилейын билдәләүсе әүҙем авторыбыҙ - Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылында йәшәүсе халыҡ табибы **Марат Рәжәп улы ИШМӨХӘМӘТОВты** ихлас ҡотлайбыҙ. Юбилярға һаулыҡ, оҙон ғүмер, илһамлы ижад һәм тынғыһыҙ эҙләнеүҙәрендә уңыштар теләйбеҙ.

**"Киске Өфө"ләр.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## ХАҠТАР ТЕШЛӘШӘ

**Хаҡтарҙың көн дә тиерлек арта барыуына һәр кем шаһит. Быйның шулай булыуын Башстат хеҙмәте уҙғарған тикшеренеүҙәр ҙә дәлилләй. Мәҫәлән, былтырғы йылдың апрель айы менән сағыштырғанда йәшәү 7,5 процентҡа артҡан. Күҙаллауҙар буйынса ағымдағы йылдың аҙағына инфляция 4,5-6,1 процентҡа етәсәк.**

Ошо ваҡыт эсендә иң ҡиммәтләнгәне - он, уға хаҡ 45,1 процентҡа артҡан. Быйның сәбәбен белгестәр былтырғы йылдың ҡоро килеүендә күрә. Онға хаҡ артыуы, тәбиғи, ондан әҙерләнгән башҡа аҙыҡ-түлеккә лә хаҡтың артыуына килтергән. Шулай уҡ иҫерткес эсемлектәргә лә хаҡтар 23,4 процентҡа күтәрелгән. Һөт һәм колбасаға, ярашлы рәүештә, хаҡтар 7,5 һәм 3,4 процентҡа артҡан. Ә бына шәкәр һәм йомортҡаға хаҡтар, киреһенсә, төшкән. Машина хужалары ла бензинға хаҡтың артыуын һиҙгәндер. Ягыулыҡ өсөн хаҡтар 8,8 процентҡа күтәрелгән. Шулай уҡ дарыуға (4,2 процентҡа), торлаҡты ҡуртымға алыуға (16,8 процентҡа), торлаҡ-коммуналь хужалыҡ өлкәһендә (12,7 процентҡа), транспортҡа (4,1 процентҡа) ла хаҡтар артҡан.

*ШАҢДАУ*

# ҺУҒЫШ БАШЛАНҒАН КӨН...

## бөгөн дә хәтерҙә

**Фашистик Германия агрессорҙарының бер ниндәй иҫкәртеүһеҙ СССР сиктәрен үтеүенә һәм һуғыш башлауына быйыл 22 июндә 72 йыл тулды. Был көндө хәтерләүселәр ҙә, унан бигерәк, тарихтағы иң ҡанлы, иң күп ҡорбанлы был һуғышта ҡатнашыусылар сафы ла ныҡ һирәгәйҙе. Шулай ҙа ундайҙар бар әле. Бөйөк Ватан һуғышы йылдары менән бәйле хәтирәләре менән уртаҡлашыуын һорап, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, 2-се дәрәжә Ватан һуғышы ордены кавалеры, "Японияны еңгән өсөн" һәм башҡа миҙалдар менән бүләкләнгән Баймаҡ районы Темәс ауылы аҡһаҡалы Абдулхалик Мөхәмәҙей улы ИРНАЗАРОВҡа мөрәжәғәт иттек. Һүҙ - ҡунағыбыҙға:**

- Яҙғы сәсеү тамамланғас, беҙҙең ауылдың "Ударник" колхозына Баймаҡ-Темәс автомобиль юлының Иҫән ауылы менән Түбә ҡасабаһы араһындағы бер саҡрымлыҡ араға юл төҙөү бурысы йөкмәтелде. Мин, ун дүрт йәшлек үҫмер егет, колхозда тимерсе булып эшләй инем. Бригадалағы ағайҙар менән килеп, үҙбушатҡыслы арбалы ат менән юлға тупраҡ, балсыҡ, ҡырсынташ ташый башланым.

22 июнь көнө берҙәм генә эшләнек тә, көн кискә ауышҡас, киске ашҡа туҡтаныҡ. Шул мәл Баймаҡ яғынан бер һыбайлы күренде. Беҙгә етеү менән: "Бөгөн Германия Рәсәйгә һөжүм иткән! Һуғыш башланған!"- тип хәбәр һалды. Ағайҙар башын тотоп, ҡайғыға ҡалды, иҫемдә - әлеге шомло хәбәрҙе килтергән юлаусының йөҙө лә үтә ҡайғылы ине. Ҡайтырға сыҡҡайныҡ, юлыбыҙға тәүге мобилизацияланған ауылдаштарҙы тейәгән еңел йөк машинаһы осраны. Фронтҡа алыныусыларҙы шулай юлда ғына оҙатып ҡалдыҡ. Ошо көндән башланды беҙҙең өсөн ас-яланғас тормош, фронт өсөн арымай-талмай эшләүҙәр...

1944 йылдың 22 ноябрендә үҙемде лә әрмегә алдылар. Өфө ситендә "Сиған яланы" тип аталған ерҙә урынлашҡан 28-се Өфө уҡсылар полкында 6 ай әҙерлек үткәс, 8 июндән 1229-сы Ҡыҙыл Байраҡ һәм Суворов орденлы уҡсылар полкында - Японияла, 1946 йылда 84-се айырым пулемет-артиллерия батальонында разведчик булып, ә 1949 йылдың ноябренән 1951 йылда запасҡа киткәнгә тиклем СУ-100 үҙйөрөшлө ҡоролмаһында водитель-механик булып хеҙмәт иттем.

Бөйөк Ватан һуғышы тамамланһа ла, Совет армияһының империалистик Японияға ҡаршы хәрби операциялары тамамланмағайны әле, ул операцияларҙа тап беҙҙең полкҡа ҡатнашырға тура килде. Был стратегик операциялар Халхин-Гол йылғаһы, Хасан күле буйындағы СССР менән Маньчжурия территорияһында бара ине. Беҙгә әсирлеккә эләккән япон һалдаттары, әсир булыуҙарына ҡарамаҫтан, бик ғорур, иркен тота ине үҙҙәрен. "Һеҙ - әсир" тип әйтеп ҡара - шундуҡ ҡырҡ һүҙгә етә, хатта үпкәләп бара инеләр...

Йылдар үткән һайын тыныс тормошомда булған күп хәл-ваҡиғалар онотолһа ла, "Германия Рәсәйгә һөжүм иткән" тигән һүҙҙәрҙе ишеткән көн, айырыуса, тәүге хәбәр килтереүсе ағайҙың ҡайғылы сырайы әле һаман күҙ алдында тора...

**Иҙел РӘХИМОВ яҙып алды.**

Танылған журналист һәм яҙыусы Ризван Хажиевтың кинйә улы **Илгиз** ҡаты ауырыуҙан һуң вафат булып ҡалды. Ағайыбыҙҙың ауыр ҡайғыһын уртаҡлашабыҙ.

**"Киске Өфө"ләр.**

**Донъя бер мосафирханалыр, инсан да рухтар ғәләменән, әсә ҡарынынан, балалыҡтан, йәшлектән, ҡартлыҡтан, ҡәбер ғәләменән әхирәткә күсеп киткән бер юлсылыр. Ауыр тупрағы еңел булһын мәрхүмдең.**

АФАРИН!

# ҺҮҘ - ИЛҺАМ УЛ,

## ул - илаһи...

**Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының Бәләкәй залында сәхнә теле буйынса дәрестәр сиктәрендә "Һүҙ - илһам ул, һүҙ - илаһи..." тип аталған нәфис һүҙ, шиғыр кисәһен тамаша ҡылдыҡ. Кисәне ойоштороусы - ошо дәрестәрҙе алып барыусы Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисы Хөрмәтулла ҮТӘШЕВ.**

Билдәле яҙыусы, драматург, сценарист, телетапшырыуҙар алып барыусы, тарихсы Эдвард Радзинскийҙың "Тарих йомаҡтары" тип аталған телетапшырыуҙарын ҡарағанығыҙ бармы? Мәскәү тарихи-архив институтын тамамлаған яҙыусының тарих йомаҡтарын сисә-сисә, йомғаҡтарын тағата-тағата, тик үҙенә генә хас юғары актерлыҡ һәләте менән тыңлаусыны тарих төпкөләндәге ваҡиғаларҙың уртаһына индерә алыуы, миненсә, Рәсәй киң мәғлүмәт сараларының бер феномены булып торалыр. Мин бында яҙыусы һүҙ алып барған тарихи ваҡиғаларҙың йөкмәткеһенә иғтибар итмәйенсә, һүҙ сәнғәтенең ниндәй көскә эйә икәнлегенә генә иғтибар иткем килә. Һүҙ юҡ, уны тыңлаған һайын тыңлағы килә...

Беҙҙең төп театрыбыҙ актерҙарының ошо кисәләге сығышын тыңлағанда һәм ҡарағанда, ниңәлер, нәҡ Эдвард Радзинский иҫемә төштө. Лилиә Ғәлинаның Азамат Ҡәҙерғоловтың "Үгәй атай" хикәйәһен яттан тасуири уҡыуы ошо кисәнең кульминация нөктәһе булғандыр, тием. Мин был хикәйәне бер нисә тапҡыр уҡып та, уның шундай тәьҫир көсөнә эйә икәнлеген белмәгәнмен икән, ә Лилиәнең һүҙ ҡөҙрәтен тәрән тойоуы һәм актерлыҡ оҫталығы ярҙамында мин был хикәйәне, улай ғына ла түгел, уның авторын үҙемә өр-яңынан аса алдым. Лилиә 5-7 минут эсендә бер үҙе тотош моноспектакль уйнап күрһәтте беҙгә.

Гөлмирә Исмәғилева арҙаҡлы ғалимыбыҙ Ғайса Хөсәйеновтың Ҡаһарман кантон хаҡындағы әҫәренән өҙөк башҡарҙы. Уның сығышын тыңлағанда мин милли модернизация, милли яңырыу хаҡында уйландым. Илебеҙ башлыҡтары хәҙер модернизация хаҡында күп һөйләй, күп осраҡта эштәре һөйләүҙән уҙмай. Ә халҡыбыҙҙың арҙаҡлы Ҡаһарман кантоны был хаҡта 1812 йылда Парижға инеп барғанда уҡ уйланған, уйланып ҡына ҡалмаған, Рәсәй батшалығы аша башҡорт балаларын донъяның иң ҙур уҡыу йорттарында уҡытыу өсөн квоталар юллаған...

Кисәләге һәр бер сығыш хаҡында ла ошолай итеп ниндәйҙер фәһемле фекер әйтергә булыр ине. Яраткан артистарыбыҙ Хөрмәтулла Үтәшев, Нурия Ирсаева, Илфат Булатов, Артур Кәбиров, Фиргәт Ғарипов, Рәзифә Динмөхәмәтова, Айнур Ситдиҡов, Урал Әминев, Юнир Ҡолан-баев, Ирада Фазлаева, Фәнис Рәхмәтов, Юлиә Ғәләүетдинова, Зилиә Хәлилова, Руслан Хайсаров күренекле башҡорт шағирҙары Дауыт Юлтый, Мостай Кәрим, Рәми Ғарипов, Раушил Бикбаев, Зәйнәб Бейешова, Шәриф Биҡҡол, Марат Кәримов, Рәғизә Янбулатова, Риф Мифтахов, Самат Ғәбиҙуллин, урыҫ шағиры Константин Симонов ("Көт мине", Рәми Ғарипов тәржемәһе) шиғырҙарын башҡарып, тыңлаусылар өсөн был шағирҙарҙың тағы ла бер һыҙатын асты кеүек.



Лилиә Ғәлина.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Ә бит халҡыбыҙ тарихының һоҡланғыс биттәре, ҡаһарманлыҡ миҙгелдәре хаҡында ошондай кисәләр, сығыштар үткәрергә ниндәй мөмкинлектәребеҙ барлығын да иҫбатланы был кисә. Бының өсөн инде сәхнә оҫталарының яҙыусылар, тарихсылар, ғалимдар, сценарий яҙыусылар менән берлектә ижад итеүе генә талап ителә.**

Әмир ҒҮМӘРОВ.

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# ТӘБИҒӘТТЕҢ...

## ыуыҙ йәшел мәле

**Һары - һарғылт, һары алтын.** Һары - ҡыҙыл менән йәшел араһындағы, алтын төҫөндәге төҫ. Башҡорт халҡының алтынға үҙ мөнәсәбәте, ул уны артыҡ баһаламай ҙа, шуға ла алтын төҫө телмәребеҙҙә бөтөнләй тиерлек ҡулланылмай. Уның ҡарауы, **еҙ төҫ** тигәнде ишетергә була. Ныҡ сағыу һарыны беҙҙең яҡта **сей һары** тиҙәр. Ә **аҡһыл һары** тип башҡорттар кешенең тәненә йә сәсенә ҡарата әйтә. Беҙ рус теленә эйәреп, оранжевый тип әйтергә күнеккән ҡыҙғылт төҫ башҡортса **зәғфәрән төҫө**, тип аталған. Зәғфәрән - "шафран/шафранный" һүҙенән килеп сыҡҡан. Зәғфәрәндең асыҡыраҡ сағылышы **зәғфәрән һарыһы** тип йөрөтөлгән.

**Күк - күгелйем, күк-күмгәк, күкһел/күкшел, күмгел(т), күм-күк, зәңгәр, зәңгәрһыу.** Спектрҙағы төп төҫтәрҙең береһе булған күк төҫ йәшел төҫ мәғәнәһендә лә (мәсәлән, үләнгә ҡарата), аҡ төҫ мәғәнәһендә (мәсәлән, атҡа ҡарата) лә ҡулланыла: **күк үлән, күк юрға**. Йәшел һыртлы йоҡа ғына йылтыр йылға балығын **күкйөн** тип йөрөткәндәрен ишеткәнем бар. Дөйөм алғанда, күк төҫө телдә әүҙем ҡулланыла, халыҡ үҫемлек, сәскәләрҙе әллә ни айырып тормай, төҫөнә ҡарап, аҡ сәскә, күк сәскә, ти ҙә ҡуя. Сирень ағасы - **күксин**, күк түбәле турғайҙы **күкбаш** тип атайҙар.

Башҡорт телендә күк йөҙөнөң төҫөн билдәләгәндә **зәңгәр** (йәшел менән күк араһындағы, руссаһы - голубой) төҫ ҡулланыла. Психологтар зәңгәр төҫтө күңел күтәренкелеген, күккә олғашыуҙы аңлатыусы төҫ, тип билдәләй. Ул шулай уҡ сафлыҡ символы ла. Яҙын талдың япраҡ ярыр алдынан бөрөгә тулышып, күгелйем аҡ төҫкә ингән сағын рәшә төҫөндәге талдар тиҙәр. Рәшә - башҡорт телендә бер нисә мәғәнәгә эйә. Был миҫалда рәшә - "бәҫ" тигәнде аңлата. Рәшә - "бәҫ" тигәнде аңлата.

**Ҡөрән төҫ** (бурый, буровато-коричневый) - **ҡөрән, ҡөрәнһыу, ҡоба, ҡолан, ҡоңғорт, ҡуңыр, ҡуңырт, һор, һорғолт, һоро**. Ҡөрән - ҡыҙғылт ҡара төҫ. "Бежевый" тип йөрөтөргә ғәҙәтләнгән төҫ - **аҡһыл ҡөрән** була. Бына был төҫ төркөмөн беҙ тик русса ғына атарға күнеккәнбеҙ. **Ҡара ҡөрән** -красно-бурый, сейә ҡөрән - бордовый, **ҡара ҡөрән** - рыжевато-бурый тип тәржемә ителә. Төҫтәренә ҡарап, ҡоба ат (ҡоба - светло-бурый), ҡоба һыйыр, ҡоба ҡаҙ (ҡыр ҡаҙы), ҡоба тал һүҙҙәре барлыҡҡа килгән. **Ҡолан** (светло-коричневый) сәс төҫөнә ҡарата әйтелә. **Ҡоңғорт** - ҡуҙҙәргә ҡарата - "светло-карий", сәскә, малдың йөн төҫөнә ҡарата - "светло-каштановый". Был һүҙ тағы ла ҡараҡ тәнле тире төҫөнә ҡарата ҡулланыла. **Ҡуңыр** - темно-бурый, **һор** - светло-бурый, светло-коричневый.

**Буҙ төҫ** (серый) - көлһыу күгелйем төҫ. Ҡурғаш төҫө, күкһел тип тә әйтелә. Былардан тыш, **көл төҫө** тигәнде ишеткәнегеҙ барҙыр. Көл - ул нимәләр янғандан ҡалған күкһел төҫтәге онтаҡ, ә көл төҫө, тимәк, күкһел төҫ.

Ләйсән НАФИҠОВА.

(Башы 24-се һанда).

АҠЫЛ-ҠАҘНА



Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.

# ҠЫРҠТА БУЛҺА ЛА...

## ҡыҙ булһын

Ҡырҡ йыл ямғыр яуһа ла, шыма ташҡа һыу үтмәҫ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Нинә кисәге ҡайғыларға һәм хаталарға йәбешеп ятырға? Әйҙәгеҙ, алға киттек!

**(Будда).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Урмансы булып эшләүсе ҡарт атай өлкән улына урмандағы ҡоштар өсөн ҡуйылған тағараҡтарҙы тикшереп, аҙыҡ менән тултырып сығырға ҡуша.**

**- Ярҙамға ҡустыңды ла эйәрт, - ти ул. Өлкән улы ризаһыҙ ғына һүҙ ҡата:**

**- Ә ҡустым юл буйы мыжыуҙан башҡаны белмәй...**

**- Мин бит һиңә әллә ҡайҙа алыҫ китергә түгел, ә яҡын-тирәләге тағараҡтарҙы ғына тикшерергә ҡушам... - тип аптырай ҡарт.**

**- Барыбер мыжыясаҡ, - ти өлкән улы. - Өҙләкһеҙ туҡтай, ял итә. Уның менән йөрөһәм, көнөм әрәмгә генә үтәсәк. Шуға мин үҙем генә йүгереп йөрөп сығам...**

**Ҡарт хәйләкәр генә йылмайып ҡуя һәм:**

**- Ярай, был юлы мин кинйәм менән үҙем генә урап сығам урманды, алыҫтағыларын да ҡарарбыҙ бер юлы... - ти, "алыҫтағыларын да" тигәнгә айырыуса баҫым яһап.**

**Атай менән кинйә ул йыйынала ҙа, урманға сығып китәләр. Алыҫтағы биләмәгә тиклем барып етәсәктәрен белгәс, кинйә ул үҙенең көсөн һаҡларға кәрәк икәнен аңлай. Ул бер ни өндәшмәй генә ауыр төктө күтәреп, аяҡ аҫтына ҡарап, һаҡ ҡына атлай һәм бер минутҡа ла туҡтап тормай, ял итеү тураһында уйлап та ҡарамай. Әгәр ҙә билдәләнгән биләмәне ваҡытында урап сығып өлгөрмәһәләр, ҡараңғы төшкәнсегә тиклем әйләнеп ҡайта алмаясаҡтар. Ул хатта күпме тағараҡты урап сыҡҡандарын да иҫәпләмәй, алда улар тағы ла күберәк буласаҡ икәнен генә белә. Әммә...**

**- Бына урап та сыҡтыҡ, бөгөнгә етте, - ти ҡарт бер саҡ бушаған төктө һелкетеп.**

**- Нисек инде, етте? - тип аптырай кинйә ул. - Беҙ бит яҡын-тирәләге тағараҡтарҙы ғына урап сыҡтыҡ әлегә...**

**- Мин шулай планлаштырғайным да инде, - ти ҡарт атай.- Ағайыңа ла шулай тиғәйнем бит...**

**Кинйә ул күккә күтәрелеп ҡарай: төш ваҡыты етеп кенә килә әле. Ә элек был эш күләмен башҡарыуға көн оҙоно ла етмәй торғайны. Етмәһә, ул бик ныҡ арый ине. Әле ул арығанын да һиҙмәне.**

**- Оло эшкә тотонғанда, ниндәйҙер икеләнеүҙәргә һәм ялыуҙарға бүленеп, ваҡытыңды әрәм итмәһәң, элек ауыр тойолғандар еңеләрәк тә, тиҙ ҙә эшләнәсәк. Шуның өсөн, Айҙың үҙенә тоҫҡа "уғыңды", йондоҙҙарға эләгерһең...- тип һығымта яһап ҡуя ҡарт атай. Кинйә ул был ишараны мәңгелеккә һеңдергәндер, тип ышанғы килә".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: Гөлфиә ЯНБАЕВА.
Мөхәррирләт: Әхмәр ҮТӘБАЙ, Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Таһир ИШКИНИН, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
Беҙҙең блог: blog.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru
kiskeufa@ufacom.ru
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Баш мөхәррир урынбаҫары 246-03-24
Бухгалтерия 246-03-23
Хәбәрселәр 252-39-99
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 21 июнь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.
«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673
Тиражы - 5501
Заказ 2358